ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

18-24 июль (майай) 2015

№29 (655)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Исемендән яҙма...**



телһеҙ-илһеҙ ҡалырһың 3

**Беҙҙең йәшебеҙ бик өлкән**

Быны Иҙриси ҙә, Петр Рычков та, башҡалар ҙа иҫбатлай



7

**Шүлгәнташта төҙөләсәк музей...**



тарихыбыҙҙы киләсәккә илтер 8-9

**Көнүҙәге сафлыҡ...**



йәрҙе, илде, халҡыңды, донъяны яратыуҙан ул 11

ТВ-программа 14


## УРАҘА БАЙРАМЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН, ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘРЕБЕҘҘЕ ХОҘАЙ ҠАБУЛ ҠЫЛҺЫН!

!

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эскән кешеләр беҙгә йәшәргә ҡамасаулай...

***Артур ХИСМӘТУЛЛИН, "Киске Өфө" гәзите водителе:*** Эскән кешеләрҙән иң хәүефлеләре, минеңсә, "ҡырын тейәп" алып, руль артына ултырырға батырсылыҡ иткән йән көйөгө водителдәр. Күпме фажиғә, бәлә-ҡаза, күҙ йәштәренә сәбәпсе була уларҙың был алабарман, енәйәти ҡылығы! Ошоға тиклем дә уларға ҡаршы ниндәйҙер көрәш саралары ҡулланырға тырышып ҡаранылар, тик күп осраҡта иҫерек водителдәр "еңелсә ҡурҡыу" тойоғоһо киҫереп кенә яуаплылыҡтан азат ҡалып килде: суд күп осраҡта уларға шартлы яза сығарыу менән сикләнә, йә ғәйепләнеүсе зыян күреүселәргә аҡса биреп ҡотола, йә булмаһа, иҫерек килеш авария яһаған кеше һыуҙан ҡоро сығыу юлдарын яҡшы белгән "крутой" булып сыға. Әҙме ни законды һәм хоҡуҡ һаҡсыларын үҙ файҙаһына бора ала торған башҡа әмәлдәр... Үткән йома ғына әле, мәҫәлән, алкотестер күрһәтеүенсә, бер шешә араҡы эсеп алған К.Федотов тигән әҙәм иртә менән (!) үҙенең ҡиммәтле "Ауди" машинаһына ултырып, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй елдереп килә торғас, "Йәшел сауҡалыҡ" районында ҡаршы юлға сығып, "Лифан"ды бәреп осора, өҫтәүенә, тағы ике иномарканы ла эләктереп алып китә. "Лифан"дың водителе 31 йәшлек кенә ҡатын фажиғә урынында йән бирә, ә уның ҡыҙы ауыр хәлдә больницаға оҙатыла. Ғәжәп: иҫерек водителдең үҙенә бер ни ҙә булмаған, ә янындағы пассажиры, башы бәрелеп, шулай уҡ дауаханаға эләгә.

Бындай хәлдәр оло юлдарҙа ла, Өфө урамдарында ла йыш ҡабатланып тора. Иҫерек килеш ошондай енәйәт ҡылыусыларҙы күпме "баштарынан һыйпарға" була һуң? Был өлкәлә бер аҙ тәртип булдырыуға өмөт тыуып тора шулай ҙа: ошо йылдың 1 июленән иҫерек водителдәрҙе иркенән мәхрүм итеү тураһында РФ Енәйәт кодексына үҙгәрештәр индерелде. Әгәр иҫерек килеш руль артына ултырған водитель ошо хәлдә ҡабатлап эләгә ҡалһа, ул инде хоҡуҡ боҙоусы ғына түгел, ә енәйәтсе булып иҫәпләнә һәм енәйәт яуаплылығына тартыласаҡ. Элек бындай осраҡта, йәғни ҡабатлап тотолғандан һуң 50 мең һум күләмендә штраф һәм өс йылға машина йөрөтөү таныҡлығынан мәхрүм итеү ҡарала ине. Яңы статья буйынса бындай кешеләргә хәҙер максималь санкция - РФ Енәйәт кодексының 264-се статьяһы буйынса өс йылға машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итеп, ике йылға колонияға ултыртыу язаһы ҡарала. Иҫерек водитель ғәйебе менән кеше ғүмере өҙөлгән осраҡта яза сараһы арттырылыуы ла ихтимал. Был йәһәттән законды ҡәтғиләштермәй тороп, ниндәйҙер ыңғай һөҙөмтәгә өлгәшеүе икеле. Минең үҙемдең фекерем шундай: эскән килеш руль артына ултырып тотолған водителде мәңгелеккә таныҡлыҡтан мәхрүм итергә кәрәк, шул саҡта бер кем дә икенсе тапҡыр шул уҡ енәйәтте ҡабатлай алмаҫ ине. Ә инде таныҡлығы булмаған килеш машина йөрөтә икән, ул хатта эсмәгән булһа ла иркенән мәхрүм ителһен ине. Юғиһә, күп осраҡта енәйәттән аҡса түләп ҡотолоп ҡалалар. Ә бит аҡса менән үлгән кешене ҡайтарып та, алмаштырып та булмай!

**(Даумы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТИРМӘЛЕ АУЫЛҒА КИЛЕГЕҘ!

**ШОС һәм БРИКС саммиттары үткән көндәрҙә Конгресс-холдың аҫҡы майҙансығындағы Өфө амфитеатрында "Ватан" этник паркы асылғайны. Сит ил делегациялары башҡорттарҙың милли йолалары һәм мәҙәниәте, шулай уҡ республика ҡаҙаныштары менән тап ошонда танышты. Был аҙнала "Ватан" паркы өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтарына ла үҙ ишектәрен асты.**

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

✓ *Күптәр, бигерәк тә Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан кеүек элекке союздаш республикаларҙан килгән журналистар, русса белеүгә ҡарамаҫтан, үҙҙәренең туған телендә генә интервью бирергә теләк белдерҙе.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урыныңҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# "РУС ТЕЛЕН ӨЙРӘНЕГЕҘ,

## башҡорт телен өйрәнегеҙ!"

**Рәмзиә КӘРИМОВА, Башҡортостан юлдаш телевидениеһының махсус хәбәрсеһе:** Һуңғы көндәрҙә Өфөлә үткән ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттарында журналист булараҡ ҡатнаштым. Донъя кимәлендә бик мөһим һаналған сарала алған тәьҫораттар бихисап, әммә иң мөһиме, һәр халыҡҡа үҙенең туған телен өйрәнеү нисек кәрәк булыуын тағы ла нығыраҡ аңланым. ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттарында ҡатнашыусы төрлө милләт вәкилдәре менән аралашып, уларҙың һәр береһененң үҙ әсә теленә иҫ киткес иғтибарлы, ихтирамлы булыуын күреп һоҡландым. Күптәр, бигерәк тә Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан кеүек элекке союздаш республикаларҙан килгән журналистар, русса белеүгә ҡарамаҫтан, үҙҙәренең туған телендә генә интервью бирергә теләк белдерҙе. Хатта русса аҙмы-күпме һуҡалаған ҡытайҙар ҙа беҙҙең менән тәржемәсе аша аралашыуҙы хуп күрҙе. Быны был хәл уйландырҙы ла инде мине. Беҙ булһаҡ, башҡаларҙы унайһыҙ хәлгә ҡалдырмайыҡ, күнелдәрен китеп ҡуймайыҡ, тип, вата-емерә булһа ла дөйөм аңлашылған телдә аңғәмәләшер инек әле.

Эйе, беҙ күп осраҡта сит илдәргә тиңләшергә, улар менән тығыҙ бәйләнеш булдырырға теләп, сит телдәрҙе, мәҙәниәттәрҙе өйрәнеүгә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Президентыбыҙ Владимир Путиндың ошо сара сиктәрендә журналистар менән осрашыуында Рәсәй төбәктәренән килгән бер журналистың: "Беҙҙең балаларыбыҙға ниндәй телдәрҙе өйрәнергә кәрәк?"- тигән һорауына: "Рус телен өйрәнергә кәрәк, башҡорт телен өйрәнергә кәрәк", - тиеүе көтөлмәгән, әммә бик күңелгә яҡын яуап булды. Үҙ туған телеңде белмәһәң, һин үҙ илеңдең патриоты була алаһыңмы ла, патриотлығың булмаһа, ил алдында торған бөгөнгө глобаль мәсьәләләрҙе хәл итергә илтифат итә алаһыңмы? Ошолай аңланым мин үҙем ил Президентының был ишараһын.

ШОС һәм БРИКС илдәре саммиты Башҡортостан, Рәсәй өсөн иҡтисади йәһәттән генә түгел, башҡорт халҡының мәҙәниәтен, тарихын башҡаларға танытыу йәһәтенән дә ыңғай һөҙөмтәләр бирер, тип ышанам. Милләттәштәрҙең күбеһе саммиттарҙы ситтән генә күҙәтһә лә, унда ҡатнашҡан зыялыларыбыҙ башҡорт теленең башҡа милли телдәр араһында үҙ урыны булырға тейешлеген аңлап, халҡыбыҙға еткерһә ине. Беҙҙең тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, рухи ҡомартҡыларыбыҙ, сәнғәтебеҙ донъя кимәлендә билдәле башҡа күп һанлы халыҡтарҙыҡынан ҡайтыш түгел, әммә һаҡлауға нығыраҡ мохтаж. Барыһынан элек үҙебеҙ, милләттәштәр һаҡларға бурыслы туған телде. Ил Президенты әйтмешләй, башҡорт телен өйрәнеп, башҡортса һөйләшеп...

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Эскән кешеләр беҙгә йәшәргә ҡамасаулай...*

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлбикә ЙӘНБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Тураһын ғына әйткәндә, эскән кешеләр, ғөмүмән, беҙгә йәшәргә ҡамасаулай. Үҙемдең өйҙә эскән кеше юҡ, шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар барыбер минең кеүек тыныс ҡына йәшәп ятҡан бик күптәрҙең теңкәһен ҡорота. Шунан уйлап ҡарағыҙ инде: ғаиләләрендә былдай әҙәмдәргә нисек түҙмәк кәрәк! Тормош түгел, тамуҡтыр инде улар менән йәшәүе... Элек подъезд ишектәре шар асыҡ торған замандарҙа нисек түҙҙек икән шуларға, тип аптырайым хәҙер. Аҫҡы ҡаттағы магазиндан теләһә ниндәй әтрәгәләм, шешә хаҡына ялланып йөк бушатыусы эскеселәр төйәк иткән урын булды бит дөрөҫөн әйткәндә беҙҙең ул подъездар. Ярай әле кодлы йоҙаҡтар уйлап сығарып, бер аҙ тыныс булып ҡалды. Тик бының менән генә эскеселәр бөтмәне, әлбиттә. Кис етһә, урамға сығыуы ҡурҡыныс ине. Шуларҙы күрмәҫ өсөн генә һуңғы бер нисә йыл йәҙо алдынан саф һауа һулап, йөрөп килеү ғәҙәтемдән баш тартырға тура килде хатта. Ҡалала ғына түгел, ауылда ла шул уҡ хәл, хатта күпкә хөртөрәк тә. Унда инде кодлы йоҙаҡҡа бикләнеп ултырып булмай. Полицияһы ла юҡ эргәлә. Шуға күрә ауыл эскеселәре бигерәк ҙур хәүеф тыуҙыра. Ишектән булмаһа, тәҙрәнән килеп инерҙәр. Әйткәндәй, бергә эшләгән хеҙмәттәшебеҙ янырак тыуған ауылына ҡайтып, ҡот осҡос хәбәр алып килде. Тап май баштарында, Бөйөк Еңеү байрамы алдынан була был. Эшләмәй өйҙә ятҡан ике эскесе әҙәм ете төн уртаһында бер өлкән генә ветеран олатайҙың тәҙрә рамын алып өйөнә төшә һәм уны туҡмап, аҡса таптыра башлай. Әмәле ҡалмаған бабай уларға һуңғы 5-6 менен бирергә мәжбүр була. Ауыл тарихында булмаған хурлыҡлы хәл! Ярай ҙа иртәнсәк полиция саҡыртып, теге енәйәтселәрҙе төрмәгә алып барып ябалар. Башҡа әрәмтамаҡ әшнәләренә һабаҡ булһа, шәп тә бит (кана ла берәй биш йылға ултыртып ҡуйһалар), тик эсә барып, андарын юйған потенциаль енәйәтселәр һабаҡ, ғибрәт тигән нәмәне беләме икән һуң...Шул эскелек арҡаһында ауыл халҡы ла хәҙер һәр кеме үҙенә бикләнде. Хатта элекке шикелле гөрләшеп, бер-береһенә ярҙамға - өмәләргә лә йөрөмәҫ булдылар бит. Берәй эш эшләтәм тиһәң, иң тәүҙә араҡы сығарып ултыртырға кәрәк. Ә эскән кеше ҡулынан ниндәй эш килһен инде? Бер нисә йыл элек ауылыма ҡайтып, әсәйемдең өйөнә газ үткәртеү кәрәк булғас, 2 метр тирәһе тәрәнлектәге соҡорҙо ҡатын башым менән үҙем ҡаҙығаным иҫтә. Нисек тә шул эскеселәрҙе яҡын юлатмаҫ өсөн инде. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: эскесегә көнөң төшмәһен, уның менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәргә яҙмаһын, ә инде йәшәргә мәжбүр булғандарға Хоҙай ярҙам, һаулыҡ бирһен, тип теләйем.

***Рәзилә МИҢНУЛЛИНА, тәрбиәсе:*** Ғүмер буйы эскесе ирҙән яфаланып йәшәргә тура килде: туҡмалып, башым-күҙем күгәреп эшкә бара алмай ултырған ваҡыттар ҙа, балаларымды етәкләп, өйҙән ҡасып сығып, кешелә, бик булмағанда мунсала, һарай баштарында ҡунып та йөрөлдө.. Ҡасанға тиклем шулай дауам итер ине икән, белмәйем, ләкин бер көн килеп буй еткергән улым менән ҡыҙым икеһе бер һүҙҙән мәсьәләне ҡабырғаһы менән алдыма ҡуйҙы. Әмәлгә ҡалғандай, улым Өфөләге колледждарҙың береһенә уҡырға инеп ҡайтҡайны. "Әйҙә, әсәй, өсәүебеҙ ҙә китәбеҙ Өфөгә!" тине лә ҡуйҙы балалар. Быңдай ҡыйыу уй башыма ла инеп сыҡмай ине. Улым, һеҙҙе ташлап, уҡырға китмәйем, тигәс, тотоҡ та ҡапыл ғына йыйына һалып, сыҡтыҡ та киттек. Килеп урынлашыу ҡыйынлыҡтарын һөйләп тә тормайым, Алла ярҙамы менән изге күңелле кешеләр осрап ҡына торҙо юлыбыҙҙа, рәхмәт барыһына ла. Хәҙер ҡыйынлыҡтар онотолдо. Ятаҡ бүлмәбеҙҙе фатир итеп бирҙеләр. Тик барыбер әлеге эскелек тигән нәмә юҡ-юҡта үҙен иҫкә төшөрөп, күңелде болғатып ҡуя: күршебеҙ эскесе булып сыҡты. Беҙгә бер ни ҙә янамай, уныһына шөкөр, тик ана шул иҫерек ирҙең ҡартайып бөткән әсәһен әшәке һүҙҙәр менән һүгенеп әрләүен, туктауһыҙ унан эсергә аҡса таптырып яфалауын ишетә-күрә йәшәүе ауыр. Ҡатыны менән айырылышып, фатирҙарын бүлеп алғас, күршеләремә ошо хосусилаштырылған ғаилә ятағы эләккән икән. Иҫерек улынан ҡасып, әбей йыш ҡына беҙгә лә инеп ҡунғылай. Эскесе ҡоторонған мәлдәрҙә беҙгә лә йоҡо юҡ: йоҡа ғына стена аша төнө буйы ҡысҡырып һүгенгәнә ишетелеп тора. Полиция саҡыртыуҙан да файҙа юҡ - бына шулай йәшәй бирәбеҙ. Ләкин мин зарланмайым. Элекке тормошом менән сағыштырғанда, ожмахта йәшәйем бит, тик әбекәйҙе генә йәлләп, йөрәгем һығыла...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ТИРМӘЛЕ АУЫЛҒА КИЛЕГЕҘ!

**(Башы 1-се биттә).**

Парк Өфө амфитеатрының бөтөн территорияһында урынлашҡан, "Этноауыл" проекты уның төп объекты булып иҫәпләнә. Комплекс ете тирмәнән тора, уларҙа төбәктең бөтөн үҙенсәлеге сағылған. Беренсе тирмәлә башҡорттарҙың көнкүреше күрһәтелгән. Көнкүреш әйберҙәрен БР Милли музейы тәҡдим итә. Икенсе тирмәлә кейеҙ һуғыу, ағас һырлау, ҡымыҙ бешеү кеүек халыҡ кәсептәре менән танышып була. Өсөнсө тирмәлә Башҡортостан ерҙәре байлығы - нефть, алтын, баҡыр, металдар, ярым ҡиммәтле таштар тураһында мәғлүмәт тупланған. Дүртенсе тирмәлә республиканың тәбиғәте тураһында һөйләп, бал һәм ҡымыҙ тәҡдим итерҙәр. Бишенсе тирмә Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләт вәкилдәре менән таныштыра. Алтынсы тирмәлә милли костюмдарҙы кейеп ҡарарға, фотоға төшөргә була. Өфөнөң киләсәктәге архитектураһы менән ҡыҙыҡһыныусылар етенсе тирмәлә үҙ һорауҙарына яуаптар алыр. Шулай уҡ тирмәләрҙә сувенирҙар, бал, милли кейем һатып алырға буласаҡ, ти ойоштороусылар.

Этнопарк сентябрь аҙағына тиклем эшләйәсәк. Был майҙансыҡ ҡалала үткән тематик саралар өсөн ҡулланыласаҡ, мәҫәлән, яҡын арала унда урам театрҙары, музыканттар сығыштары, һөнәрселәр йәрминкәләре, балалар байрамдары, хәйриә һәм спорт акциялары үтеүе көтөлә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Киләһе йылда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһында рәйеслек итеү Рәсәйҙән Үзбәкстанға күсә. Сара 2016 йылдың сентябрендә Ташкентта уҙғарыласаҡ тип күҙаллана. Был хаҡта Үзбәкстан президенты Ислам Кәримов Өфөлә белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, Совет ултырышының аныҡ датаһы донъялағы, шулай уҡ Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһына ингән илдәрҙәге хәлдәргә ҡарап билдәләнәсәк.

✓ШОС һәм БРИКС саммиттарына килгән Ҡаҙағстан ҡунаҡтары Милли әҙәбиәт музейының филиалы - Миәкә районының Туҡһанбай ауылындағы Мифтахетдин Аҡмулла музейында булды. Делегацияны яҙыусы, әҙәби тәнҡитсе, Әхмәт Йәсәүи исемендәге Халыҡ-ара ҡаҙаҡ-төрөк университетының вице-президенты профессор Ергобек Кулбек етәкләне. Ҡунаҡтар шулай уҡ Бөрйән районындағы Шүлгәнташ мәмерйәһендә һәм Миәкә районындағы Нарыҫтау изге шишмәһендә булды.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 2016 йылдағы федераль парламент һайлауҙарын декабрҙән сентябрҙең өсөнсө йәкшәмбеһенә күсерҙе. Документ менән "РФ Федераль Йыйылышының Дәүләт Думаһына һайлауҙар тураһында"ғы законды 5-се һәм 102-се статьяларына төҙәтеү индерелде.

✓18 июлдә Мәскәүҙең "Коломенское" дәүләт музей-курсаулығында һабантуй ойошторола. Байрам ошо күркәм урында бишенсегә уҙғарыла. Байрамда Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, "Далан" һәм "Каруан" төркөмә артистары сығыш яһаясаҡ. Хәйбулла һәм Баймаҡ райондары паркта башҡорт ауылын ҡорасаҡ, сувенирҙар күргәҙмә-һатыу, биҙәү-ҡулланма сәнғәте күргәҙмәһе, милли уйындар ойоштороласаҡ. Башҡортостандың рәсми делегацияһын Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рөстәм Мәрҙәнов етәкләй.

✓"Рособрнадзор" сығарылыш уҡыусыларын һәм уларҙың ата-әсәләрен документтар тапшырғанда юғары уҡыу йортонон мәғариф эшмәкәрлеге алып барыуға хоҡуғы тураһындағы лицензияһы һәм дәүләт аккредитацияһы таныҡлығы барлығын тикшерергә кәңәш итә.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

**ШОС һәм БРИКС саммиттары һөҙөмтәләре буйынса үткәрелгән матбуғат конференцияһында бер журналистың: "Был ойошмаларҙа аралашыу теле ниндәй булыр, беҙ ниндәй телдәрҙе өйрәнергә тейеш?"- тигән һорауына Рәсәй Президенты Владимир Путиндың: "Рус телен өйрәнегеҙ, башҡорт телен өйрәнегеҙ", - тип яуаплауы, уйынлы-ысынлы әйтелһә лә, ошондай абруйлы халыҡ-ара сараны заманса кимәлдә үткәреү өсөн һәр йәһәттән уңайлы эш шарттары тыуҙырған Башҡортостан еренә рәхмәтле баһа булараҡ та яңғыраны.**

# ИСЕМЕҢДӘН ЯҘМА...

## телһеҙ-илһеҙ ҡалырһың



Ә бит уйлап ҡараһаң, мәҫәлән, Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған Урта Азия илдәре - Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Тажикстан делегациялары менән аралашыу өсөн, ысынлап та, башҡорт телен белеү ҙә етә, бер ниндәй тәржемәсе лә кәрәк түгел, сөнки улар телдәре төрки төркөмөнә ҡараған туғандаш халыҡтар. Һәм, ғөмүмән, кем иленә ҡунаҡ булып киләһең, шул илдең телен белеү - ул кешенең мәҙәни кимәленең күрһәткесе лә бит. Ә инде башҡорт ерендә төйәкләнеп, быуаттар буйы ошо аҫаба халыҡ менән арҡаға арҡа терәп тигәндәй йәшәп ятҡан башҡа милләт халыҡтары өсөн ил Президентының кинәйәһе бигерәк тә сәпкә барып тейҙе: улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла, тигәндәй булды түгелме? Һуңғы йылдарҙа, юғиһә, башҡорт теленән нисек ҡотолорға белмәй бит бәғзе берәүҙәр. Башҡортостан Республикаһының махсус законы менән нығытылған аҫаба халыҡ телен өйрәнеү буйысынан балалары күңелен дүндермәксе улар. Тимәк, улар балалары киләсәген киңерәк планда күҙ алдына килтермәй, ә ниндәйҙер ваҡсыл, бер көнлөк, бәйләнсек принциптарын алға һөрмәкселәр: башҡортса уҡытмаҫҡа баланы - и баста! Өфөлә булып үткән ШОС һәм БРИКС саммиттары һабағы заманыбыҙ геополитикаһының көнсығыш илдәренә ныҡлап йөҙ бороуын күрһәтә түгелме? Тимәк, балаларыбыҙ киләсәктә ошо мөхиттә аралашып көн күрәсәк, тигән һүҙ бит был. Ошо халыҡтар телен икмәктоҙлоҡ булһа ла белеү уларҙы цивилизация арбаһында үҙҙәрен ят һәм артыҡ йәндәр итеп тоймаҫҡа ярҙам итер ине, бәлки, тигән уй ҙа килә башҡа...

Үҙ еребеҙҙә үҙ телебеҙгә башҡаларҙың мөнәсәбәтен булдырыуҙа күп йәһәттән беҙ үҙебеҙ ҙә булышлыҡ итәбеҙ бит. Әйтәһе һүҙҙең кинәйәһе ошо хаҡта ине, тик фекер ебен алыҫтаныраҡ башларға тура килер инде. Миҫалһыҙ һүҙ - буш һүҙ бит ул, юғиһә.

...Мин ятасаҡ дауахана палатаһында өс ҡатын һәүетемсә генә көн күрә ине инде. Ҡырҡ йәштәрҙәге ике тиҫтерҙең береһе - башҡорт, икенсеһе татар ҡатыны. Сирлеләрҙең өсөнсөһө - минең йәштәрҙәге рус ҡатыны - пенсионер. Ул тороп ултыра, ләкин йүнләп йөрөй алмай - тубығы шешкән, артроз. Теге ике йәш ҡатын был ханымды, йәлләптер инде, йүгереп йөрөп ҡарашалар: ашарына алып киләләр, системаһы тамып бөтһә, шәфҡәт туташын саҡырып килтерәләр, икеһе ике яҡтан ҡултыҡлап, уколға йөрөтәләр... Бик һоҡландым йәштәрҙең ярҙамсыллығына, ихласлығына. Тик бына уларҙың ысын исемдәрен белә алмай ҡаңғырҙым тәүҙә. Теге рус ҡатынын улар икеһе лә Валентина Михайловна тип ололап өндәшә, ә уныһы йәштәрҙең береһен - Зоя, икенсеһен Рая тип йөрөтә. "Ой, как повезло мне: и Зойка, и Райка хорошие, добрые..." - тип маҡтап та алды уларҙы миңә Валентина Михайловна. Шул саҡ өләсәйем иҫкә килеп төштө: "Зойка" тигән бик һөтлө һыйыры бар ине уның. Күршебеҙҙәге Шәмсикамал инәй иһә кәзәһен "Райка" тип һөйөр ине. Валентина Михайловна минең исемде лә һорай ҡалды. "Туҡта, миңә ниндәй ҡушамат тағыр икән?" тип көтәм. "Ну, Фаечка, значит" - ти һалды ул, минең исемемде ишетеү менән. - А то все равно забуду, а так Фая - легко же..." "Нет, уважаемая Валентина, - тием мин тыныс булырға тырышып. - Или как положено, или - никак!" "Господи, а что тут такого?" - ти Валентина ҡаштарын йыйырып. "А вам будет приятно, если я тоже захочу сократить Валентину на Вау-вау?" - тием мин, көлөргә лә, асыуланырға ла белмәй. Ошо һөйләшеүҙән һуң теге ике ҡатындың ысын исемдәрен һораным. Һылыуҙарҙың "Зойка"һы - Зөләйха, "Райка"һы Райхана булып сыҡты. Йырлап торған боронғо, матур исемдәр... Бер аҙ нәсихәт тә уҡып алырға тура килде үҙҙәренә. Ата-әсәләре, мулла ҡушҡан изге исемдәрҙе боҙоуға юл ҡуйыу - кешенең аураһын, хатта яҙмышын боҙоуға килтереүе бар, ти бит бәғзе ғалимдар. Был ни дәрәжәлә хәҡиҡәткә тап киләлер - әйтә алмайым, минең өсөн шуныһы мөһим - минең еремдә йәшәйҙәр, мин эскән һыуҙы эсәләр икән - халҡымдың да йола, ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирам менән ҡараһындар; Башҡортостаныбыҙҙы ла Башкирия тип еңелгә һупаламаһындар ине, сөнки кесе ватанымыҙҙың Конституцияла законлаштырылған рәсми исеме бар - Башҡортостан Республикаһы ул; ер-һыу атамаларыбыҙҙы Банное озеро, Капова пещера тип боҙмаһындар; һылыу ҙа уңған ҡыҙҙарыбыҙға "Зойка", "Райка" тигән ҡушамат таҡмаһындар! Үҙ исемебеҙ, тимәк, үҙ иманыбыҙ һағында тороу - һәр кемебеҙҙең намыҫ эше. Исемдәребеҙҙе лә әйтә алмаған рәхмәтһеҙ әҙәмдәргә яҡты йөҙ күрһәткән һайын, улар һине кешегә һанамаясаҡ. Өндәшмәгәс, аңлатып бирмәгәс, ҡушаматҡа риза булып, алдында йүгерекләп йөрөгәс, тимәк, шулай булырға тейеш, тип уйлай ул белекһеҙ әҙәм. Исемеңдә юғалта күрмә, милләттәшем, юғиһә илеңдән дә, телеңдән дә яҙырһың, тәүбә-тәүбә!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# МАҠТАУҘЫ ЛА...

## лайыҡлы күтәрә беләйек

**ШОС һәм БРИКС саммиттары башланыр алдынан Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Владимир Мединскийҙың Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова менән бергә Милли музейға сәйәхәт ҡылып, унда "Үҙәк Евразияның традицион мәҙәниәте: Ебәк юлдың мираҫы" тип аталған күргәҙмәне асыу тантанаһында ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәт сараларында яҙылғайны инде. Һүҙем ул хаҡта ғына түгел.**

Сарала Үҙәк Азия халыҡтарының мәҙәниәтен сағылдырған 400-ҙән ашыу экспонат (Рәсәйҙең этнография музейы фондынан), "Өфө-II" ҡаласығынан табылған арт-объекттар менән таныштырҙылар. Һәр кемдә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан "Өфө-II" ҡаласығы ҡомартҡылары боронғо Өфөнөң Ебәк юлдың төньяҡҡа таралған тармаҡтарының береһе булыуын иҫбатлаған бер күренеш булыуы тураһында ла телгә алынды.

"Бөйөк Ебәк юл - ул донъя тарихындағы үҙенсәлекле күренеш. Сауҙа һәм үҙ-ара хеҙмәттәшлек аша ундан ашыу дәүләт Азия менән Европаны бәйләп торған. Ул юл Ҡытай диңгеҙҙәренән башланып, Һиндостанды иңләп, тотош Үҙәк Азия аша үткән. Бөгөн беҙгә Көньяҡ Уралға килеп еткән каруан хәрәкәттәре лә ҡыҙыҡлы. Юҡҡа ғына был күргәҙмәне асыуҙы тап ШОС һәм БРИКС саммиттары үткән көндәргә тап килтермәнек - ҡасандыр беҙҙең ата-бабалар булдырған бәйләнештәрҙе дауам итәбеҙ, яңынан тергеҙәбеҙ", - тине Владимир Ростиславович Мединский. "Өфө-II" ҡаласығында табылған боронғо ҡомартҡылар нигеҙендә айырым күргәҙмә лә эшләп булыр ине, тигән фекер ҙә еткерҙе ул йыйылыусыларға.

Артабан Милли музейҙың генераль директоры Ғәли Вәлиуллин ҡунаҡтарҙы хәрби тарихты сағылдырған экспонаттар менән дә таныштырҙы. Рәсәйҙең мәҙәниәт министры, данлыҡлы Башҡорт кавалерия дивизияһынан 78 яугирҙың Советтар Союзы Геройы булғанын ишеткәс, хатта ғәжәпләнеп ҡалды: **"Мин хәрби тарих менән бик ҡыҙыҡһынам, әммә башҡорт дивизияһының батырҙар һаны буйынса рекордсы икәнен белмәй инем! 1812 йылда Елисей яланында сабып йөрөгән башҡорт атлыларының вариҫтары булыу бына нимә ул!"** Шәп әйтте бит! Халҡыбыҙ тураһында маҡтау һүҙе ишетеү менән йөҙҙәребеҙ яҡтырып, арҡалар тағы ла турайып китте. Бай тарихы, боронғо үткәне булған башҡорт халҡын ихтилалдарҙан һуң быуаттар буйына баҫҡандар, эҙәрлекләгәндәр, шуға күрә маҡтау һүҙе ишетеү беҙҙең өсөн ят күренеш кеүек тә хатта. Ә бит был лайыҡлы тәрбик һүҙҙәре! Маҡтауҙы ла мәртәбәле, кимәлле итеп ҡабул итергә өйрәнәйек! Маҡтайҙар икән - рәхмәт һәм артабан ғорурлыҡ менән алға атлайыҡ! Бөгөнгөбөҙ ҙә киләсәктә тарих булып ҡаласаҡ. Беҙҙең вариҫтарыбыҙ ҙа ошо маҡтау һүҙҙәрен уҡып, ҡеүәт алырлыҡ булһын.

Эйе, В. Мединскийҙың был фекерен "Бәйләнештә" социаль селтәрендә яҙып сыҡҡас, "Ниңә унын маҡтауына иҫегеҙ китте?" тиеүселәр ҙә булды. Иҫем китеүҙә түгел эш, иң мөһиме - Рәсәй мәҙәниәт министры әйтте бит яҡшы һүҙҙе. Бер ниндәй мөнәсәбәт тә белдермәүе бик ихтимал ине. Аҙмы ни башҡорт халҡының ҡаһарман тарихынан сөй эҙләүселәр? Ә мәҙәниәт министры тап хәрби тарихыбыҙҙы сәнғәт күренеше булырҙай итеп һүҙ әйтте. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелергә генә торған, нескә кисерешле милләттәштәремдең йөрәгенә им булып барып ятһын был кәлимә!

**Лариса АБДУЛЛИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Омскиҙа дүрт ҡатлы казарма стенаһының бер өлөшө һәм ҡыйығы 13 июлдә, һалдаттар йоҡлаған саҡта, урындағы ваҡыт буйынса төнгө сәғәт берҙә, емерелеп төшкән. Бинала 300-ҙән ашыу хәрби хеҙмәткәр булған. Был һәләкәттә Башҡортостандан хәрби хеҙмәткә саҡырылған биш егеттең ғүмере өҙөлдө. Башҡортостандың хәрби комиссариатынан хәбәр итеүҙәренсә, улар Салауат районынан Рөстәм Шәйхуллин, Рәнис Алтынбаев, Сибайҙан Рөстәм Йомағолов, Саҡмағош районынан Фидан Мәмлиев, Белореттан Вадим Нафиҡов. Уларҙың барыһы ла быйыл яҙ Ҡораллы Көстәр сафына алынған. Омскиҙа емереклектәр аҫтында ҡалған 42 кеше табылған, улар араһында 23 һәләк булыусы һәм 19 яраланыусы бар.

✓Омскиҙа Һауа десанты ғәскәрҙәренең казармаһы емерелеү һөҙөмтәһендә йәрәхәтләнеп, бөгөнгө көндә Мәскәүҙә дауаланған Башҡортостан һалдаттарына республиканың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллеге һәр яҡлап ярҙам күрһәтәсәк. Әлеге ваҡытта Мәскәүҙә республиканан ике егет дауалана. Стәрлетамаҡтан Владимир Петров - Бурденко исемендәге хәрби клиник госпиталдә, Илнур Ҡыуандыҡов Вишневский исемендәге 3-сө хәрби-клиник дауаханаһында ята.

✓Башҡорт дәүләт университетында абитуриенттарҙан 15 меңгә яҡын ғариза ҡабул ителгән. Быйыл Башҡорт дәүләт университетының төп вузы бюджет урындарға 1138 студент: көндөҙгө бүлеккә - 974, ситтән тороп уҡыу бүлегенә 164 кеше ҡабул итәсәк. Тағы ла меңгә яҡын абитуриентты Башҡорт дәүләт университетының филиалдарына ҡабул итергә ниәтләйҙәр. Магистратураға уҡырға инергә теләүселәр өсөн бюджет урындарының һаны - 563.

✓Өфө дәүләт нефть техник университеты етәкселеге иң матур БДИ һөҙөмтәләре менән уҡырға ингән беренсе курс студенттарына юғары стипендия тәғәйенләнәсәк. Әле уҡыу йортона 18,5 мең ғариза бирелгән, ғаризалар йыйыу дауам итә. Быйыл университет бакалавриат программаһы буйынса 1258 кешене, магистратура программаһы буйынса 655 кешене бюджет урындарына ҡабул итә.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Саммит уҙғарылған көндәрҙә Өфөгә бөтәһе 10,5 мең ҡунаҡ килгән. Сара тамамланғас Рәсәй Президенты Владимир Путин республика халҡына рәхмәт белдергән. "Был беҙҙең өсөн иң яҡшы баһа", тине төбәк Башлығы.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## САММИТТАРҘА ЙӘШТӘР ТАУЫШЫ

**"Красноусол" шифаханаһында үтте ШОС илдәренең Йәштәр советы ултырышы. Унда Өфөлә үткән Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһына ҡараған биш илдең: Рәсәйҙең, Ҡытайҙың, Ҡаҙағстандың, Тажикстандың, Ҡырғыҙстандың өс тиҫтә йәш сәйәсмәне, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай янындағы Йәштәр палатаһы ағзалары Таһир Ғиззәтуллин, Арсен Зиннәтуллин, Өфө ҡала округы Советы депутаты Тимур Зәйнуллин һәм Федерация Советы ҡарамағындағы Йәштәр палатаһы ағзаһы Василий Петров та ҡатнашты. Йәш сәйәсмәндәр "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында үткән матбуғат конференцияһында ултырыш һөҙөмтәләре тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашты.**

Рәсәй йәштәре исеменән сығыш яһаусы Андрей Свинцов: "Был ултырышта ҡабул ителгән ҡарарҙар башлыса ШОС илдәре етәкселәренә кәңәш булараҡ тәҡдим ителә. Шулай ҙа беҙ, ШОС янындағы Рәсәй йәштәре берлеге, үҙебеҙҙең проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса әүҙем эш алып барабыҙ", - тип, һуңғы йылдарҙа был ойошма вәкилдәре тарафынан алға әйҙәлгән идеялар тураһында һөйләп үтте. Ултырышта ШОС илдәре телеканалын, "ШОС илдәре йәштәре картаһы"н булдырыу мәсьәләләре ҡаралған, экстремизмға ҡаршы көрәш тураһында ла һүҙ булған, Рәсәйгә ҡарата санкциялар темаһы ла ситтә тороп ҡалмаған. Башҡортостан йәштәре кәңәшмә барышында ҡунаҡтарға үҙ эштәре, атап әйткәндә, Бөйөк Ватан һуғышында хәбәрһеҙ юғалған һалдаттарҙы эҙләү буйынса тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Был идеянан әҫәрләнеп, Ҡырғыҙстан Йәштәр берлеге рәйесе Таалайбәк Дайырбеков Бөйөк Ватан һуғышы темаһы Урта Азия халыҡтары өсөн дә яҡын, ҡәҙерле икәнен, был юҫыҡта уларҙың илендә лә ветерандарға ихтирам һаҡланыуын белдерҙе, Мәскәү янындағы ҡаты һуғыштар ваҡытында Урта Азия халыҡтарынан торған хәрби берәмектең батырлығы тураһында һөйләне. "Беҙҙең тарихыбыҙ уртаҡ. Ҡытайҙы Япон милитаризмынан азат итеүҙә лә беҙҙең илдең өлөшө ҙур", - тип, СССР армияһының Ҡытай халыҡ армияһына күрһәткән ярҙамын да һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Ҡаҙағстан вәкиле Аян Сакошев ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттарын әҙерләп, Өфө ҡалаһы тағы ла күркәмләнеп китеүен, бында гел йылы хистәр менән килеүен белдерҙе, ҡаҙаҡ һәм башҡорт телдәренең бик яҡын, туғандаш тел булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ҡытай Халыҡ Республикаһынан килгән Ду Сян ханымдың сығышы ла йылы тойғолар утты. Ул инглизсә түгел, ә үҙ туған телендә телмәр тотоп, ҡытай теленең моңон ишеттерҙе. Саммиттарҙың рәсми теле булып рус һәм ҡытай теле һайланыуын белгән кешеләр өсөн был ул тиклем ғәжәп тә тойолманы. Ҡытай вәкиле ШОС һүҙенең ҡытай телендәге аббревиатураһы "мәғдән" (сплав) тигән һүҙ менән тап килеүен дә әйтте һәм ШОС илдәре хеҙмәттәшлегенең мәғдәндәй ныҡлы булыуына ышанысын белдерҙе.

**Иҙел РӘХИМОВ.**

*КӨНАУАЗ*

# ПУТИНДЫҢ РӘХМӘТЕ БЕҘГӘ ҘУР БАҺА...



**Өфөлә уҙған матбуғат конференцияһында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС халыҡ-ара саммиттарына йомғаҡ яһаны.**

Баш ҡалала үткән саммиттарға ил етәкселеге юғары баһа бирҙе, тип хәбәр итте республика Башлығы. Уның һүҙҙәренсә, саммит уҙғарылған көндәрҙә Өфөгә бөтәһе 10,5 мең ҡунаҡ килгән, улар лайыҡлы ҡаршыланған, йәшәү һәм эш өсөн уңайлы шарттарҙың барыһы ла тыуҙырылған. Сара тамамланғас Рәсәй Президенты Владимир Путин республика халҡына рәхмәт белдергән. "Был беҙҙең өсөн иң яҡшы баһа", тине төбәк Башлығы журналистар менән осрашыуҙа. Артабан Рөстәм Зәки улы, Конгресс-холл, "Өфө" халыҡ-ара аэропорты һәм башҡа объекттар төҙөүҙе финанслау хаҡында һөйләне. Билдәләнеүенсә, отелдәр төҙөүгә генә 11,5 миллиард һум шәхси инвестициялар йәлеп ителгән. Конгресс-холл быйыл көҙ һәм 2016 йылда республикала үтәсәк халыҡ-ара сараларҙы ҡабул итергә әҙер. Ошо бинала саммиттар уҙған урындар буйлап экскурсиялар ойоштороласаҡ, тип билдәләне республика Башлығы.

Быйыл Рөстәм Хәмитовтың ошо яуаплы дәүләт вазифаһын биләүенә биш йыл тула. Ул Өфөлә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттарын уҙғарыуҙы ошо йылдарҙағы төп ҡаҙаныш тип атаны. Төбәк Башлығы һүҙҙәренсә, ул үҙ ваҡытында саммиттарҙы Өфөлә үткәрергә тәҡдим иткән. Федераль кимәлдәге чиновниктарҙың күбеһе быға ҡаршы булһа ла, Рәсәй Президенты Владимир Путин ышаныс белдергән.

Рөстәм Хәмитов дәүләткә "Башнефть" компанияһын кире ҡайтарыуҙы төбәк Башлығы вазифаһында эшләү осорондағы тағы ла бер мөһим ҡаҙаныш тип иҫәпләй. "Акциялар пакетын дәүләткә кире ҡайтарыу - Рәсәйҙә һирәк күренеш. Был тәҡдимде хуплағаны өсөн Владимир Владимирович Путинға рәхмәт белдерәм", - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. Башҡортостанға бүленәсәк яҡынса биш миллиард һум күләмендәге дивидендтар социаль эштәргә йүнәлтеләсәк, тип иҫкә төшөрҙө ул.

Затон күперенең икенсе сиратын төҙөү тураһында һорауға яуап биреп, Рөстәм Хәмитов, был проект федераль бюджеттан финансланмаясаҡ, әммә күпер 2016 йылдың көҙөндә республика аҡсаһына сафҡа индереләсәк, тип хәбәр итте.

Республика Башлығы Өфөлә ШОС һәм БРИКС саммиттарын уңышлы ойошторғандан һуң икенсе эш урыны тәҡдим итһәләр ҙә, вазифаһынан ваҡытынан алда китергә йыйынмауы хаҡында белдерҙе.

Сәғәт ярым дауам иткән матбуғат конференцияһында республика етәксеһенә 20-гә яҡын һорау бирелде.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

## ТАҒЫ ЛА ЯҢЫ СКВЕР...



**Ғөбәйҙуллин урамы һәм Салауат Юлаев проспекты киҫелешендә яңы сквер барлыҡҡа киләсәк.**

Һөҙөмтәлә яҡын-тирә йорттарҙа йәшәүселәр ғаилә менән ял итеү урынына эйә буласаҡ. Әлеге ваҡытта бында эштең ҡыҙған мәле. Ҡом килтерелгән, тротуар бордюрҙары ҡуйыла. Төп асфальт юлының киңлеге дүрт метр, тротуарҙарҙыҡы өс метр буласаҡ. Скверҙа ағастар ултыртыласаҡ, сәскә түтәлдәре, Альп тауҙары эшләнәсәк, яңы эскәмйәләр ҡуйыласаҡ һәм сүп-сар контейнерҙары урынлаштырыласаҡ. Төҙөкләндереү эштәре йыл һуңына тамамланасаҡ.

## МАТУРЛАНА!



**Һуңғы дүрт йыл эсендә баш ҡалала меңдән ашыу йорт ихатаһы ремонтланған. Былтыр махсус программа буйынса 78 ихата ремонтланһа, быйыл 46 объектты яңыртыу планлаштырыла.**

Йорт ихаталары территорияһын һәм уларға инеү юлдарын төҙөкләндереүгә асфальт түшәү, юл һыҙатын киңәйтеү, бордюрҙар ҡуйыу инә. Майҙаны мөмкинлек биргән объекттарҙа шәхси машиналар өсөн өҫтәмә парковка урындары булдырыла һәм балалар өсөн уйын майҙансыҡтары йыһазландырыла. Ремонтланырға тейешле ихаталар исемлеген төҙөгәндә асфальт ҡатламының ҡәнәғәтләндермәүе генә түгел, халыҡтың күп һанлы мөрәжәғәте лә, ҡала Советы депутаттарының йөкләмәләре лә иҫәпкә алына. Муниципалитет даими рәүештә ремонт эштәрен контролдә тотоп, уның сифатын һәм үтәлеү ваҡытын тикшереп, халыҡтың фекеренә ҡолаҡ һалып, кәрәкле урында үҙгәрештәр индереп тора.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Интерфакс" Халыҡ-ара мәғлүмәт төркөмө үткәргән Милли рейтингта 2014/2015 уҡыу йылы һөҙөмтәләре буйынса Өфө дәүләт авиация университеты - 43-сө, БашДУ -102-се, Башҡорт дәүләт аграр университеты 144-се урын яулаған. Был рейтингта Рәсәйҙең 200 юғары уҡыу йорто ҡатнашҡан.

✓Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Әҙәбиәт йылы уңайынан "Изге ҡулдарҙан китап" акцияһында ҡатнашыусыларҙың сираттағы осрашыуы булды. Эстафета Башҡортостандың Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры Азат Ибраһимовҡа тапшырылды. "Китап" нәшриәте эстафетаһы милли баҫмаларҙы пропагандалау, йәш быуынды тәрбиәләү һәм китап уҡыуға ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу маҡсатында уҙғарыла. Эстафетала ҡатнашыусылар нәшриәт магазинында китап һайлап алып, уларҙы ойошмаларға, күп балалы ғаиләләргә бүләк итә ала.

✓Рәсәй Президентының республикалағы ҡабул итеү бүлмәһендә хеҙмәт ҡануниәтен үтәү, хеҙмәт килешеүҙәре төҙөү һәм тарҡатыу, эш, ял ваҡыты, хеҙмәткә түләү мәсьәләләре буйынса граждандар менән осрашыу ойошторҙо. Сараны төбәктәге Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы бүлеге етәксеһе Эльвира Бәхтизина уҙғарҙы.

✓Прагала "А" кадеттары араһында заманса биш төр ярыш буйынса Европа беренселеге тамамланды. Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостан спортсыһы Аделина Ибәтуллина сығыш яһаны. Ул шәхси, команда ярыштарында һәм эстафетала өс алтын миҙалға лайыҡ булды.

✓Черниковка биҫтәһендә йәшәүселәр Өфө моторҙар эшләү берекмәһе мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда урынлашҡан мобиль пунктта ҡан тапшыра ала. 14 июлдән 31-нә тиклем иртәнге сәғәт 9-ҙан 1-гә ҡәҙәр Республика ҡан биреү станцияһының күсмә бригадаһы донорҙар ҡабул итә. Мобиль пунктҡа бер ниндәй ҙә справка килтерергә кәрәкмәй, табиптар донорҙарҙы үҙҙәре тикшерә. Үҙең менән даими йәки ваҡытлыса пропискалы паспорттың булыуы мөһим.

✓Апрель айынан баш ҡалала 2-се "Колхоз баҙары - Башҡорт драма театры" маршруты буйынса "Китап уҡыусы троллейбус" йөрөй. Республика киң мәғлүмәт саралары редакциялары ҡыҙыҡлы программа әҙерләй, билдәле әҙиптәрҙе һәм артистарҙы саҡыра, матбуғатҡа яҙылыу ойоштора. Акцияла "Башҡортостан", "Йәшлек", "Өмөт", "Ҡыҙыл таң", "Молодежная газета", "Йәншишмә" республика гәзиттәре, "Әллүки" журналы ҡатнашты.

✓ *Электр плитәһе булмаған өйҙәрҙә йәшәүсе ҡала халҡы электр энергияһы өсөн 20 тингә артығыраҡ түләйәсәк. Хаҡы - 2,55 һум, ә электр плитәһе ҡуйылған йорттарҙа түләүҙәр 14 тингә артасаҡ һәм 1,79 һум тәшкил итәсәк.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# САНКЦИЯ ВАҠЫТЫ ОҘАЙТЫЛДЫ

**Евросоюз рәсми рәүештә Рәсәй Федерацияһына ҡарата ҡулланылған иҡтисади санкцияларҙы оҙайтыуы тураһында хәбәр итте.**

Евросоюз составындағы илдәрҙең сит ил эштәре министрҙары санкцияны 2016 йылдың 31 ғинуарына тиклем һуҙыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Евросоюз вәкилдәре шулай уҡ Ҡырым һәм Севастополгә ҡарата ла иҡтисади санкцияларҙы киләһе йылдың 23 июненә тиклем оҙайтыуы тураһында бедерҙе.

Санкциялар уҙған йылдың 1 августында индерелде, ә сентябрҙә тағы ла киңәйтелде. Санкциялар төрлө ойошмаларға һәм айырым граждандарға ҡағылды. Шулай уҡ санкциялар исемлегенә Рәсәйҙең банктары һәм нефть тармағы ла индерелде, ҡайһы бер компанияларға Евросоюз капиталы баҙарына юл ябылды. Рәсәйҙең оборона секторына ла санкциялар "эләкте".

# ТАҒЫ ХАҠ АРТТЫ...

**1 июлдән Башҡортостанда электр энергияһына тарифтар күтәрелде. Үҙгәрештәр республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты ҡарарына ярашлы көсөнә инде.**

Атап әйткәндә, электр плитәһе булмаған өйҙәрҙә йәшәүсе ҡала халҡы электр энергияһы өсөн 20 тингә артығыраҡ түләйәсәк. Хаҡы - 2,55 һум, ә электр плитәһе ҡуйылған йорттарҙа түләүҙәр 14 тингә артасаҡ һәм 1,79 һум тәшкил итәсәк. Ауыл ерендәгеләр өсөн тариф шулай уҡ 14 тингә күтәреләсәк һәм 1,79 һум тәшкил итәсәк. Был хаҡтар электр энергияһы өсөн бер тарифлы иҫәп приборҙары буйынса түләгән ҡулланыусыларға ҡағыла. Тәүлек зонаһына бүленгән тарифтар буйынса түләгән граждандар өсөн ҡаралған тарифтар менән Энергия һатыу компанияһының сайтында танышырға мөмкин.

# ЭСКӘНҺЕҢ ИКӘН...

**1 июлдән эскән килеш транспорт сараһы менән идара иткән өсөн икенсе тапҡыр тотолған водителдәр енәйәт яуаплылығына тарттырыла һәм 200 мең һумдан 300 меңгә тиклем штраф түләй йә 2 йылға рәшәткә артына эләгә. Яуаплылыҡ Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге өлкәһендә хоҡуҡ боҙған өсөн яуаплылыҡты көсәйтеү мәсьәләһе буйынса Рәсәй Федерацияһының ҡайһы бер закондар сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон менән нығытыла. Дәүләт башлығы документты 2014 йылдың 31 декабрендә хуплаған, ул 1 июлдән көсөнә инде.**

Иҫерек килеш рулгә ултырып, бер кешенең һәләк булыуына сәбәпсе булған водителдәр өсөн яза ҡәтғиләште: хәҙер иректән мәхрүм итеү ике йылдан алып туғыҙ йылға тиклем буласаҡ. ТАСС хәбәр итеүенсә, шундай хоҡуҡ боҙоусыларға билдәле бер вазифалар биләү һәм эшмәкәрлек алып барыу закон тарафынан тыйыласаҡ.

Халыҡ йәшәгән биләмәнән ситтә ҡараңғы ваҡытта яҡтылыҡты сағылдырыусы махсус билдәһеҙ йөрөгән йәйәүлеләргә 500 һум штраф түләргә тура киләсәк.

Техник юл-транспорт ваҡиғаһына килгәндә, хәҙер инспекторҙарҙы көтөп тормаҫҡа ла мөмкин. ДТП-ға эләгеүселәр ваҡиғаны, зыянланған урындарҙы фотоға йәки видеоға төшөрөп, хәрәкәтте тотҡарламаҫ өсөн машиналарын юлдан ситкә алып ҡуя һәм ОСАГО полисы менән бергә бирелгән европротокол төҙөй ала. Шулай уҡ шаһиттарҙың исемшәрифен һәм адрестарын да яҙып алырға тура киләсәк.

*ИҪ КИТКЕС!*



# КӘМЕЙМЕ, АРТАМЫ?

**Рәсәйҙә алкоголле эсемлектәр ҡулланыу сире менән яфаланыусылар һаны 2014 йылда 2013 йылдағы менән сағыштырғанда 3,9 процентҡа, йәки 85 мең кешегә кәмегән. Рәсәй Федерацияһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығы күрһәткән мәғлүмәттәргә ярашлы, алкоголле эсемлектәр ҡоллоғона дусар булыусылар һаны 2,2 миллион. Шул уҡ ваҡытта илдә 0,2 процентҡа наркомандар һаны артҡан. Уларҙың ил буйынса дөйөм һаны 535 мең кешегә еткән.**

Амфетаминдар, тоҙҙар ҡулланыу ныҡ күбәйгән. Был наркотик матдәләрҙе Сахалин, Иваново, Магадан өлкәләре, Чукотка автономиялы округы, Камчатка крайы халҡы күберәк ҡулланған. 2013 йылда 6,5 мең рәсәйле психик стимуляторҙар ҡулланһа, ә 2014 йылда был һан 54,5 процентҡаса етеп, 9,5 мең кеше тәшкил иткән.

Халыҡтың наркологик һаулығы институты директоры Олег Зыков әйтеүенсә, был статистикаға башлыса тәртип боҙоп, полиция хеҙмәткәрҙәре күҙенә салынғандар ғына эләгә, шуға был исемлеккә инмәгән наркомандар һаны ил буйынса күпкә юғары булырға мөмкин. "Тулыраҡ мәғлүмәткә эйә булыр өсөн әле был юҫыҡта социологтарҙың ентекле хеҙмәте талап ителә", - ти белгес.

2014 йылдың сентябрь аҙаҡтары - октябрь баштарында Рәсәйҙә составына билдәһеҙ наркотик ҡушып эшләнгән тәмәке ҡатышмаһы тартып ағыуланыуҙар тулҡыны үтте. Был бәлә Башҡортостанды ла урап үтмәне. Нефтекама ҡалаһында 5 кеше, шул иҫәптән 17 йәшлек үҫмер ошо матдәләрҙе ҡулланып, ағыуланып үлгән. 2015 йылда спайстарҙы ҡулланыу, таратыу, пропагандалау тулыһынса тыйылды.

Һаулыҡ һаҡлау министрлығы докладына ярашлы, Рәсәйҙә йәшәүсе һәр 50-се кеше алкоголле эсемлектәр йә наркотик ҡуллана.

2014 йылда яңы закон үҙ көсөнә ингәс, судтарға енәйәт йәки административ эштәр ҡарарына ярашлы, наркотик ҡулланыусыларҙы мәжбүри рәүештә һауыҡтырыу үҙәктәренә ебәреү хоҡуғы бирелде.

2013 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә төнгө осорҙа спиртлы эсемлектәр һатыу закон буйынса тыйылды.

Быйылдан башлап Башҡортостанда еңел алкоголле һәм йоҡно осора торған эсемлектәрҙе һатыу нәтәләрендә ваҡлап һатыу тыйылды. Ғәмәлдәге законға төҙәтмә 25 июндә бер ыңғай өҫ уҡыуҙа индерелде. Был аҙым менән закон сығарыусылар граждандарҙы уларҙың һаулығына ҡаҡшатҡыс тәьҫир иткән был эсемлектәрҙән бөтөнләй араларға теләй.

Статистика мәғлүмәттәре буйынса, бындай эсемлектәрҙе күбеһенсә 18 йәше тулмаған үҫмерҙәр эсә. Еңел алкоголле ҡатышмаларҙы 13-17 йәшлек балаларҙың 70 проценты ҡуллана. Уларҙың күпселеген ҡыҙҙар тәшкил итә. Уларҙы йыш ҡулланыусы үҫмерҙәр һаны - 30 процент.

*БЫНА ШУЛАЙ!*

# ТАҘА ҺЫУ ҠАЙҘА?

Башҡортостан Тәбиғәттән файҙаланыу һәм Экология министрлығы дәүләт аналитика контроле идаралығының лаборатор тикшереңеүҙәр мәғлүмәттәре буйынса, Урал аръяғында һыу объекттарының сифаты яҡшырыуы күҙәтелә.

Ведомстовның матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, тимер, марганец, сульфаттар, нитриттар, нитраттар һәм хлоридтар күләме буйынса Таналыҡ йылғаһындағы һыуҙың сифаты яҡшырған. Төйәләҫ йылғаһында ла баҡыр һәм марганец буйынса ыңғай динамика күҙәтелә.

- Таналыҡ һәм Төйәләҫ йылғалары буйындағы ерҙәр 2009 йылдан күҙәтеүгә алынған. Былтыр Төйәләҫ йылғаһының үҙ ҡушылдығы булған Ҡарағайлы йылғаһы үҙәнен таҙартыу һәм киңәйтеү буйынса эштәр башланды. Ошо маҡсатта федераль бюджеттан 8 миллиондан ашыу аҡса бүленде. Таҙартыласаҡ урын 11 километрҙан ашыу тәшкил итәсәк. Һис шикһеҙ, ошо сараны ғәмәлгә ашырыу ыңғай һөҙөмтә бирәсәк, - тип аңлатма бирҙе министрлыҡтың Сибай биләмә комитеты рәйесе Гөлнара Ноғоманова.

# ЭШ УРЫНДАРЫ БАР, ЭШЛӘҮСЕЛӘР ЮҠ...

Хеҙмәт һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәт сайтынан күренеүенсә, әлеге көндә был порталда 1,4 миллион буш эш урыны барлығы билдәренә. Уларҙың 100 меңен төҙөлөш тармағы өсөн хеҙмәткәрҙәр тәшкил итә. Бында ташсылар (22,6 мең), бетон ҡойоусылар (22,7 мең) айырыуса ҙур һорау менән файҙалана.

Иң кәрәкле тип һаналған хеҙмәттәрҙән икенсе урында - машина йөрөтөүселәр: 36,3 мең вакант урын. Артабан һаулыҡ һаҡлау өлкәһе килә: бында 25 мең шәфҡәт туташы һәм 17 мең табип талап ителә. Хеҙмәткәрҙәргә ҡытлыҡты ауыл хужалығы ла кисерә. Аграрийҙар ике тиҫтә мең йәшелсә үҫтереүселәргә эш урыны тәҡдим итә. Бынан тыш, Рәсәй хеҙмәт баҙарында әлегә биләнмәгән 16,5 мең ашнаҡсы һәм 14,7 һатыусы урыны бар.

Хеҙмәт һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәт етәксеһе Всеволод Волков әйтеүенсә, әлеге мәлдә хеҙмәткәрҙәр талап ителгән эш урындары бихисап - вакансиялар һаны 16 процентҡа, йәғни 200 мең урынға артҡан.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Альцгеймер

❖ Альцгеймер ауырыуына дусар булмаҫ өсөн өлкәнәйгәс тә китаптар уҡырға, кроссвордтар сисергә, ҡыҫҡаһы, интеллектуаль әүҙемлекте юғалтмаҫҡа кәрәк. Белгестәр ябай ғына күнегеү ҙә тәҡдим итә, ул Шульц таблицаһы тип атала. Ҡағыҙ битен 25 квадрат өлөшкә бүлеп, уларға 1-ҙән алып 25-кә тиклем һандар яҙып сығығыҙ. Бер нисә сәғәттән һуң һандарҙы тәртип буйынса табаһығыҙ.

❖ Мүк еләге (клюква) баш мейеһенә һәм хәтергә яҡшы тәьҫир итә.

❖ Дарыуханаларҙа һатылған аир тамыры ла ҡан тамырҙарын таҙарта. Уны ваҡлап тартып, ярты стакан порошокты 1 стакан ҡайнар һыуҙа бер аҙ төнәтеп, тәүлек буйына бәләкәй йотомдар менән эсергә.

❖ Ҡәһүә лә йөрәкте һаҡлай, Альцгеймер ауырыуын дауалай, май ҡатламдарын юҡҡа сығара.

❖ Ирга емеше Альцгеймерҙы дауалай. Ул - варикоз веналарының һығылмалылығын кире ҡайтара һәм баш мейеһе ҡан әйләнешен нормаға килтерә торған берҙән-бер емеш.

### Атеросклероз

❖ Баш мейеһе ҡан тамырҙарының атеросклерозы мәлендә 15 лимон менән 200 грамм һарымһаҡты ит турағыстан үткәреп, 0,350 литр етен майы, 700 грамм бал өҫтәргә һәм болғатырға, яҡынса 3 литр ҡатнашма килеп сыға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға. Организмдың дөйөм хәле, сәстәрҙең, тырнаҡтарҙың торошо яҡшыра, хәтер нығына.

❖ Кистән 1 баш һуғанды турарға, 1-1,5 балғалаҡ шәкәр өҫтәргә, бүленеп сыҡҡан һуған һутын иртән ас ҡарынға эсергә. Һуғанды бал менән әҙерләргә лә була: 500 грамм һуған, 400 грамм шәкәр, 50 грамм балды 3 сәғәт талғын утта ҡайнаталар, көнөнә 5-6 ҡалаҡ эсергә.

❖ Организмға гел генә В төркөмөнә ҡараған витаминдар етмәһә, ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килә. Бигерәк тә баш мейеһе ҡан тамырҙары зыян күрә.

❖ Баҡса еләгенең составындағы физетин - көслө антиоксидант. Баҡса еләгенең ҡайнатмаһы ла файҙалы, баш мейеһе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, күҙәнәктәрҙе зарарланыуҙан һаҡлай.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

**✓ XVIII быуаттың 60-сы йылдарында ҡаҙыныуҙар алып барғанда 3 кило алтын табыла һәм ул Екатерина II батшаға бүләк итеп ебәрелә. Табыштар араһында беҙҙең эраға тиклем V быуатҡа ҡараған Византия тәңкәһе лә була.**



ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**Өфөбөҙҙөң барлыҡҡа килеү датаһы быға саҡлы ла тарихсыларҙы ҡыҙыҡһындырманы түгел, ҡыҙыҡһындырҙы. Был темаға иң етди мәғлүмәтте XVIII быуаттың күренекле рус ғалимы П.И. Рычков хәбәр итә. Ул үҙенең "Топография Оренбургская" тигән хеҙмәтендә XVIII быуаттың 40-50-се йылдарында мең башҡорттары старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев менән осрашыуы, унда "Башҡорт тарихы" тип аталған ҡулъяҙма китап булыуы, тик уның 1734 йылғы ихтилал ваҡытында яныуы тураһында һөйләүен телгә ала. Ҡыҙрас Муллаҡаев П. Рычковҡа был документтың йөкмәткеһен һөйләп бирә. Ә ғалим был һөйләшеүҙә ишеткәндәрен баҫтырып сығара. Был яҙмаларҙағы төп дөрөҫлөк шул: Өфө биләмәһе рустар килгәнгә саҡлы мең башҡорттарыныҡы булған һәм ул Дим йылғаһы бассейнына тиклем һуҙылған.**

# БЕҘҘЕҢ ЙӘШЕБЕҘ БИК ӨЛКӘН

## Быны Иҙриси ҙә, Петр Рычков та, башҡалар ҙа иҫбатлай



"Башҡорт тарихы"нда XV-XVI быуаттарҙағы Башҡортостан тормошо аныҡ ҡына һүрәтләнә. Мәҫәлән, Көньяҡ Башҡортостанда Басман хан хакимлыҡ итә, уның ставкаһы Маяҡ (Аҡтүбә) тауы, йәғни хәҙерге Ырымбур тирәһендәге биләмәлә урынлашҡан була. Ҡулъяҙмала билдәләнеүенсә, Үҙәк Башҡортостанда Басмандың ағаһы Торахан хакимлыҡ иткән. Торахан ул ваҡытта хәҙерге Өфө ҡалаһы биләмәһендә йәшәй. Дим, Ағиҙел, Ҡармасан, Сиремшан, Ҡуюш, Сөн һәм Айыу йылғалары буйҙары ерҙәре лә уға ҡарай. Сығанаҡта Алтакар, Бей-Тюрәк тигән хакимдарҙың исеме лә телгә алына. Улар менән алыш ваҡытында Торахан менән Басман хан һәләк була ла инде. Алтакар еңеүсе булып сыға. Ошо ваҡиғаларҙан һуң Башҡортостанда хакимлыҡ оҙаҡ ваҡыт Аҡназар Солтан ҡулында була.

Күренекле башҡорт тарихсыһы А. Усманов үҙенең хеҙмәтендә барлыҡ ошо ваҡиғаларҙың XV-XVI быуаттарҙа булыуын раҫланы.

Сығанаҡта Басман хан да, Торахан, Аҡназар-Солтан да ноғай хандары тип әйтелә. Ләкин бында ғәжәпләнәһе юҡ. Алтын Урҙа дәүләте тарҡалғас, Башҡортостандың төп территорияһы Ноғай ханлығы составына инә, ә был ханлыҡ XV-XVI быуаттарҙа башҡорт халҡы дәүләтселегенең мөлкәт төрө иҫәпләнә. "Ноғай ханлығы", "Ноғай ханы" билдәләмәһе был ханлыҡтың идара итеүсе элиталы этник төркөмө атамаһынан килеп сыҡҡан.

Өфөгә нигеҙ һалыныу ваҡытын асыҡлау өсөн Ҡыҙрас Муллаҡаевтың һөйләгәндәрендә бик мөһим бер мәғлүмәт бар. Уның әйтеүенсә, Өфө биләмәһендә урыҫтар килгәнгә саҡлы уҡ "Ағиҙелдең өҫкө яғынан Өфө йылғаһы тамағына саҡлы һуҙылған бөйөк ҡала" булған. Бында заманында Торахандың һәм Аҡназар Солтандың ставкаһы торған. Ошо мәғлүмәттәрҙе яҙып алған Рычков был ҡаланың булыуында ныҡлап инана һәм "был ҡаланың һуңғы хакимы Түрә Бабай Ҡылысов" булған тип яҙа. А. Усманов раҫлауынса, ул хакимдың исеме Түрә Баба-Туҡләс була. Рычков белдереүенсә, ул ҡышын ғына бында йәшәгән, ә йәйҙәрен Өфөнән 50 километр алыҫлыҡта, Дим йылғаһы буйында, ҙур Аҡзыярат күле, Ислаҡ йылғаһы буйҙарында йәшәгән. Хәҙер ҙә ул күл янында мәсет бар, ә Ислаҡ йылғаһында мәсет тә, таш йорттар ҙа күренә, ләкин улар емерелеп төшкән". Түрә Баба-Туҡләстең йәйләгән урыны Шишмә ҡасабаһы янында, Хөсәйенбәк һәм Торахан кәшәнәләре янында булған, тип күҙаллана. Торахан кәшәнәһенең "Башҡорт тарихы"нда телгә алынған Торахан ҡәбере булыуында шик юҡ.

Хөсәйенбәк һәм Торахан кәшәнәләре тарихсылар тарафынан, башҡорттарҙа Исламдың тулыһынса раҫланған осоро ҡомартҡылары, тип баһалана. Һәм килтерелгән факттарҙан шундай һығымта яһала: Өфө XIV-XVI быуаттарҙа эре мәҙәни һәм сәйәси үҙәк, урындағы хакимдарҙың йыйылыу урыны булған, ә хәҙерге Шишмә ҡасабаһы биләмәһе һәм Аҡзыярат ҡәберлеге ошо хакимдарҙың йәйге торағы һәм зыяраты булған. П. Рычковтың, башҡорт хандары ҡышты ҡалала үткәреп, йәйен тораҡтың Дим йылғаһы буйына Аҡзыярат тирәһенә күсеүен раҫлауы Өфө ҡаласығы һәм Торахан, Хөсәйенбәк кәшәнәләренән торған археологик ҡомартҡылар комплексын X һәм XV быуаттарҙағы башҡорт хакимдарының берҙәм ҡомартҡыһы итеп ҡарау мөмкинлеген бирә. Бында П. Рычковтың, хәҙерге Өфө биләмәһендә имән стеналар менән уратып алынған ҙур ҡала булған, тигән раҫлауын да хәтергә төшөрәйек.

Өфө ҡалаһы биләмәһе археологик ҡомартҡыларға ифрат бай, улар уның тарихының тағы ла боронғораҡ этабына ишара яһай. Бында, мәҫәлән, беҙҙең эраға тиклем VIII-IX быуаттарҙан беҙҙең эраның X-XIV быуаттарында барлыҡҡа килгән тиҫтәләгән ҡаласыҡ-ҡәлғә бар. Шуларҙың береһе "Новомостовая" урамынан башлап, Пушкин урамының түбәнге кварталдары тапҡырында урынлашҡан Өфө-II ҡаласығы. Был морон ике яҡтан да тәрән йырындар менән уратып алынған, морондоң осо Ағиҙел аша яңы күпер һалғанда емерелгән. Өфө-II морон-ҡаласығына параллель Ә.З. Вәлиди урамы буйлап тар морон һуҙылған, яҡынса V-X быуаттарҙа бында ла ҡаласыҡ булған. Ағиҙел йылғаһы буйлап күпер төҙөгәндә был морон тулыһынса ҡыйратыла. Был морондарҙың икеһе лә Сутолока йылғаһы ағышына табан тәрән йырынға барып сыға. Һәм тап ошонда XVI быуатта урыҫ күскенселәре Өфө ҡәлғә-кремлен төҙөй.

50-се йылдарҙа танылған Өфө тарихсыһы П. Ф. Ищериков Пушкин һәм Ә.З. Вәлиди урамдарындағы морон-ҡаласыҡтар биләмәһенән көршәк ярсыҡтары таба, уларҙы хәҙерге тикшереүселәр Турбаслы культураһы ҡомартҡыларына (V-VIII быуаттар) индерә. Был ҡомартҡыларҙың стратиграфик ятҡылыҡтарын белер өсөн 1957-1958 йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты етәкселегә миңә һәм П. Ищериковҡа Өфө-II ҡаласығы биләмәһендә Пушкин урамының бер-ике ихатаһында ҡаҙыныу эштәре үткәреүҙе йөкмәткәйне. Ҡаҙыныу эштәре ошо урында XVII-XVIII быуаттар заманынан - 2,5-3 метр тәрәнлектә, саҡ ҡына аҫтараҡ V-XII быуаттың тағы ла ҡеүәтлерәк археологик ҡатламдары барлығын асыҡлау мөмкинлеге бирҙе.

Билдәле булыуынса, XII быуаттың ғәрәп тарихсыһы Иҙриси башҡорттар йәшәгән илде аныҡ һүрәтләгән карта төҙөй. Ул унда Ҡараҡыя, Казира, Мазира ҡалаларын билдәләй. Был ҡалаларҙың береһе, моғайын, хәҙерге Өфө-II ҡаласығы биләмәһендә урынлашҡан булғандыр.

Археологик факттарҙан иң әһәмиәтлеһе шул: был ҡаласыҡтар эргәһендә унда йәшәүселәрҙе күмер өсөн ҡорған рәүешендәге ялан-зыяраттар ҙа була. Өфөнөң XVIII-XIX быуаттарҙағы крайҙы өйрәнеүселәре хәҙерге Өфөнөң Киров районы кварталдарында, бер яҡтан - Туҡай, Ә.З. Вәлиди, Пушкин, икенсе яҡтан Ленин, Карл Маркс, Гоголь, Аксаков һәм бөгөнгө мосолман зыяратына тиклемге биләмәлә меңәрләгән ҡурғандар булыуын асыҡлай. Улар әлеге көнгәсә асыҡлана тора һәм уларҙа көмөш һәм алтын әйберҙәр табыла. Тимәк, был ҡурғандарҙа юғары вазифалағы кешеләр күмелгән булған. Мәҫәлән, XVIII быуаттың 60-сы йылдарында хәҙерге Хөкүмәт йорто урынында ҡаҙыныуҙар алып барғанда 3 кило алтын табыла һәм ул Екатерина II батшаға бүләк итеп ебәрелә. Табыштар араһында беҙҙең эраға тиклем V быуатҡа ҡараған Византия тәңкәһе лә була. Ошондай уҡ бай табыш теге быуаттың 30-сы йылдарында хәҙерге Башҡорт дәүләт медицина университеты һәм Опера һәм балет театры тирәһендә лә табыла.

Өфө тирәһендә, Дим, Затон, Миловка биҫтәләре тирәһендә лә VI-XIV быуаттарға ҡараған ауылсыҡтар асылды. Ғөмүмән, XI-XV быуаттарҙа хәҙерге Өфө биләмәһе урынында башҡорт ҡаласыҡтары урынлашыуын раҫлаған археологик материалдар һәм яҙма сығанаҡтар шул тиклем күп. Ул ҡаласыҡтар, ауылсыҡтар, ҡурғандар һәм меңәрләгән табылдыҡтарҙың барыһында ла башҡорт эҙҙәре барлығы раҫлана.

**Нияз МӘЖИТОВ,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Башҡорттарҙың хәҙерге ауыл хужалығының мөһим тармағы булып малсылыҡ тора. Бай аҙыҡ базаһы, ҙур ер майҙандары, унда мал көтөү һәм үлән сәсеү, тамыраҙыҡтар үҫтереү малсылыҡты үҫтереү өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтарҙа Башҡортостан малсылығы мал һаны буйынса ла, уның продуктлылығы буйынса ла юғары баҫҡыстарға күтәрелә.

Башҡорт аттары борон-борондан үҙҙәренең ныҡлығы һәм сыҙамлылығы менән данлана. Бейәләр мул һөтлөлөгө менән айырылып тора. Башҡортостандың төньяҡ райондарында екке аттары (**һүрәт**), көньяҡ райондарҙа - ялан, менге аттары, таулы райондарҙа менге йөк аттары киң таралған. Был тоҡомдар барыһы ла әлеге ваҡытта ла һаҡланған, әммә көньяҡ райондарҙа - менге тоҡомдары (дон, **һүрәт**;, инглиз-дон, буденновск һ.б. тоҡомдар), ә төньяҡ райондарҙа екке аттары (рус юртаҡтары, **һүрәт**, һәм рус-америка йөк аттары) менән яҡшыртылған. Нигеҙҙә урман сығарылған тау-урман райондарында урындағы тоҡомдо башҡа тоҡомдар менән ҡушмай, үҙенең нәҫелен яҡшырталар.







Башҡорт колхоздарындағы ат фермаларында хужалыҡ, эш аттары аҫырала. Улар махсус йыһазландырылған ат аҙбарҙарында тотола һәм йыл әйләнәһенә мал аҙығы менән тәьмин ителә. Шул уҡ ваҡытта ялан райондарында, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында колхоздарҙа аттар өйөрҙәрҙә тотола.

Аттарҙы ҡышын көтөү ҡаты аҙыҡҡа ихтыяжды, биналар төҙөүгә сығымдарҙы кәметә һәм сәләмәт, сыҙам малдар үҫтереү мөмкинлеген бирә. Көньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы башҡорттарында колхоздарҙа бай үләнле ҙур майҙандарҙың булыуы, ҡышын ат көтөү өсөн көтөүлектәрҙең һалҡын елдәрҙән һаҡланыуы тибендәрҙе файҙаланыу мөмкинлеген хәҙерге ваҡытта ҡулланыу мөмкинлеген дә бирә.

Башҡорт колхоздарында (Учалы, Әбйәлил, Ейәнсура райондарында) аттар өйөр менән көтөлгәндә 50 бейәле бер өйөргә бүленә һәм уларҙы бер айғыр йөрөтә. Ҡайһы бер колхоздарҙа өйөрҙәр баҫыуҙарҙан алыҫта йөрөтөлә, икенсе урында - баҫыуҙар менән йәнәш участкаларҙа. Бындай участкаларҙы һайлағанда рельефтың, үҫемлектәр донъяһының һәм микроклиматтың үҙенсәлеге иғтибарға алына. Ҡышҡы миҙгелдә тибен урынын тауҙар ышыҡлап торған урындар һайлана. Бер колхозда ғына бындай урындар тиҫтә һәм унан да күберәк була, икенсе ерҙәрҙә аттар даими рәүештә ҙур территорияның бер урынынан икенсеһенә күсенеп йөрөй.

Апрелдә өйөрҙән йәш малдар айырып алына, унда бары тик ҡолонло бейәләр һәм бер йәшкә тиклемге тайҙар ғына ҡала.

Өйөрҙәргә бүлгәндә, тоҡом айғырҙарының сифатын иҫәпкә алып, бейәләрҙе төрҙәре буйынса бергә туплауға иғтибар итәләр.

✓ *Ул бишек - төпһөҙ. Төпһөҙлөгө - башҡорт халҡының тыуған, барлыҡҡа килгән урынының мәңгелек булыуына ишаралай. Был композицияла шулай уҡ тирмәнең көмбәҙе лә бар. Ул да символик мәғәнәгә эйә.*



# ШҮЛГӘНТАШТА тарихыбыҙҙы

**Бөрйән районында туризм объекттарын үҫтереү тураһында хәҙер йыш телгә алына. Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа ул төбәктә туристар өсөн аҙмы-күпме уңайлыҡтар тыуҙырыла башланы. Бөгөнгө һөйләшеүҙә яҡтыртыласаҡ тема ла халҡыбыҙҙың рухи мәккәһе исеменә дәғүә итерлек шәп бер музей проекты менән бәйле. Ул музей комплексында балаларҙың ялын ойоштороу ҙа ҡараласаҡ, тиҙәр. Тәбиғи һәм мәҙәни ҡомартҡыбыҙ - Шүлгәнташ мәмерйәһенән бер саҡрым ярым алыҫлыҡта урынлашасаҡ, мәмерйәнең айырым өлөштәрен, макетын һәм башҡа бик күп экспозицияларын үҙ эсенә аласаҡ был музей комплексы. Был проекттың концепцияһы архитектураһы, рухи ҡиммәттәребеҙҙе килер быуынға еткереү йәһәтенән ниндәй үҙенсәлеккә эйә? Ошо турала ҡунаҡтарыбыҙ - БР Мәҙәниәт министрлығының Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Данир ҒӘЙНУЛЛИН һәм ошо үҙәктең архитекторы Рөстәм ӘЛИБАЕВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Бынан бер-нисә йыл элек Санкт-Петербург ҡалаһынан килгән ғалим-спелеолог Юрий Ляхницкий алға киткән илдәрҙә мәмерйәләргә инеүҙе тыйып, халыҡты уның күсермәһе рәүешендә эшләнгән музейҙарға ғына индереүҙәре тураһында һөйләгәйне. Был мәмерйәләрҙәге һүрәттәргә кеше факторының насар тәьҫире менән аңлатылалыр. Ғалим: "Шүлгәнташ мәмерйәһендәге ҡомартҡыларҙы - һүрәттәрҙе һаҡлау өсөн беҙгә лә ошолайыраҡ берәй сара күрергә кәрәк ине лә бит, әммә әлегә мөмкинлегебеҙ юҡ. Һүрәттәр күҙгә күренеп төҫһөҙләнә, уларҙы бәшмәк (плесень) ҡаплай", - тигән борсолоу ҙа белдергәйне. Бөгөн килеп, Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге Шүлгәнташтың күсермәһен макет рәүешендә сағылдырған тотош бер музей комплексының проектын эшләүгә тотонған икән, был бик ҡыуаныслы хәбәр. Ошо проекттың етәкселәре, авторҙары булараҡ, унда ҡулланылған алдынғы технологиялар тураһында һөйләп үтһәгеҙ ине.**

**Д. Ғәйнуллин:** Тарихи-мәҙәни музей комплексының концепцияһы әлеге мәлдә проектлау стадияһында. Мәмерйә комплексының макетын, һүрәттәр төшөрөлгән урындарҙың күсермәләрен төҙөгәндә лазер нуры ярҙамында сканерлау ҡулланыла. Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә бындай тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау методикаһы ул тиклем үҫешмәгән, хатта юҡ кимәлендә. Ә сит илдәрҙә ул бар һәм әүҙем үҫтерелә. Беҙ был эште "ҡола яландан" башлай алманыҡ. Быға тиклем донъяла ошо өлкәлә ниндәй уңыштарға өлгәшелгән, хатта ниндәй хаталар ебәрелгән - барыһын да иҫәпкә алыу зарур, тип һанап, Европаға барып, ундағы мәмерйәләрҙә, музейҙарҙа эшләүсе белгестәр менән аралашып, уларҙың тәжрибәһен уртаҡлашҡандан һуң ғына был эшкә тотонорға йөрьәт иттек. Былтыр Европалағы бер-нисә мәмерйәне өйрәнеүсе ғалимдар менән интернет аша хәбәрләшкәндән һуң, октябрь айында ике белгесебеҙ менән бер аҙнаға сәфәргә сығып киттек. Испанияла - 3, Францияла - 4 көн булдыҡ. Тиҫтәнән артыҡ мәмерйәне һәм 5-6 музей комплексын ҡараныҡ. Испанияла - Альтамира, Францияла - Ласко, Летод, Руфиньяк, "Өс туған", Фон-де Гом мәмерйәләрен ҡараныҡ. Сәфәр барышында беҙ фән кешеләренең ни тиклем бер фекерле, бер ғәмле, бер-береһенә теләктәш булыуына инандыҡ. Улар беҙҙе матур итеп ҡабул итте, үҙҙәренең бөтөн музей комплекстары, лабораториялары менән таныштырҙы, ул комплекстарҙың нисек, ни рәүешле эшләнеүен дә аңлатты.

Европалағы тәжрибәне иҫәпкә алып эшләү беҙгә күпкә еңелерәккә тура килә. Сөнки, унда - нанотехнологиялар, яңы ысулдар йылдамыраҡ үҫешә, Көнбайыштағы белгестәр тәжрибәлерәк тә. Беҙгә улар менән тығыҙ, эшлекле бәйләнештәр булдырырға, тәжрибә уртаҡлашырға, хеҙмәткәрҙәребеҙҙе уларға командировкаларға ебәрергә кәрәк, тигән ныҡлы инаныҫка килдек. Һәр өлкәлә теге йәки был юҫыҡта яҡшы эшләгән лидерҙарҙы табыу, улар менән бергәләп алға барыу - көн талабы.

**Р. Әлибаев:** Шуныһы ҡыҙыҡ - Францияла археология буйынса Луврға тиңдәш "Яңы тарихҡаса дәүер" музейы директоры Жан-Жак Климмер беҙҙе ҡаршылап, ярты көн буйына беҙҙең менән йөрөп, башҡаларға күрһәтмәгән урындарҙы күрһәтеп, ихласлығы менән таң ҡалдырҙы. Данир Әхмәҙи улы: "Беҙҙе шундай ихласлыҡ менән ҡаршы алдығыҙ. Быны сәбәбе ниҙә?" - тип ҡыҙыҡһынғайны, Климмер: "Мин һеҙҙең изге ниәт менән килеүегеҙҙе күреп торам бит. Һеҙ тарихи ҡомартҡығыҙҙы, үҙегеҙҙең халҡығыҙың үткәнен һаҡлау маҡсаты менән килгәнһегеҙ. Шуға, беҙҙең яҡтан бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ булыуы мөмкин түгел. Беҙҙең һәр тарихсы, һәр ғалим һеҙгә яҡты йөҙ күрһәтәсәк, ярҙам итергә әҙер торасаҡ", - тине.

Европала ҡыҙыҡ үҙенсәлектәргә лә иғтибар ителде. Мәҫәлән, беҙҙә: "Ярай, иртәгә эшләрмен", - тип, эште оҙаҡҡа һуҙырға яраталар, ә сит илдә был тәңгәлдә өлгө алырлыҡ. Берәй проблемабыҙ тураһында әйтеп тә өлгөрмәйбеҙ - сит илдәге коллегалар телефондан төрлө белгестәргә шылтыратып, уларҙы беҙҙең менән таныштыра, осраштыра башлай. Улар эшкә йылдам тотона, тимәксемен.

Альтамира - донъялағы иң абруйлы музей. Ә уның директорында бер ниндәй һауаланыу әҫәре күрмәҫһең. Беҙҙең менән бергә тау-таш араһында йөрөнө, сәғәттәр буйы аралашты. Ул ғына ла түгел, беҙ ҡайтып киткәс, ике айҙан Альтамира музейы буйынса ниндәй мәғлүмәт бар, шуларҙың барыһының да күсермәһен йыйып, беҙгә ебәреп тә ҡуйҙы. Икенсе берәү булһа, беҙ ҡайтып китеү менән беҙҙе онотор ҙа ине, бәлки. Икенсе яҡтан, ул мәғлүмәттәр интеллектуаль милек булараҡ, ғәйәт ҙур баһаға лайыҡ. Кеше, ғәҙәттә, үҙенең ундай милкен таратырға яратмай бит.



**Д. Ғәйнуллин:** Уларҙың үҙҙәренең тарихи, техник, фәнни тәжрибәләре менән ихласлап бүлешеүе беҙҙең өсөн көтөлмәгән дуҫтарса аҙым булды. Шул уҡ Альтамира директоры беҙҙең халҡыбыҙҙың килеп сығышы менән ҡыҙыҡһынды, башҡорт халҡының үҙ ҡомартҡыларын һаҡларға ынтылыуына ихлас ҡыуанды.

*Тағы бер ҡыҙыҡ хәл булды. Шүлгәнташты фәндә "Капова пещера" тип атау киң таралған. Сит илдә уның халыҡ ҡушҡан ысын исеме Шүлгәнташ икәнлеген белмәйҙәр ҙә икән. Быны Альтамира директорына аңлатып биргәйнек, ул 90-сы йылдарҙа немец телендә нәшер ителгән бер китаптың тышында яҙылған дөрөҫ булмаған яҙыуҙы һыҙып, "Шүлгәнташ", тип яҙып та ҡуйҙы. Ғалимдар өсөн мәмерйәнең халыҡтан сыҡҡан исеме бик ҡиммәт икән. Шүлгәнташтың "Урал батыр" эпосы менән, атап әйткәндә, мәмерйә эргәһендәге күлдәргә бәйле икәнлеген белгәс, улар ныҡ аптыраны.*

Тағы бер ҡыҙыҡ хәл булды. Шүлгәнташты фәндә "Капова пещера" тип атау киң таралған. Сит илдә уның халыҡ ҡушҡан ысын исеме Шүлгәнташ икәнлеген белмәйҙәр ҙә икән. Быны Альтамира директорына аңлатып биргәйнек, ул 90-сы йылдарҙа немец телендә нәшер ителгән бер китаптың тышында яҙылған дөрөҫ булмаған яҙыуҙы һыҙып, "Шүлгәнташ", тип яҙып та ҡуйҙы. Ғалимдар өсөн мәмерйәнең халыҡтан сыҡҡан исеме бик ҡиммәт икән. Шүлгәнташтың "Урал батыр" эпосы менән, атап әйткәндә, мәмерйә эргәһендәге күлдәргә бәйле икәнлеген белгәс, улар ныҡ аптыраны. Европа мәмерйәләренең атамаларының килеп сығышына бәйле халыҡ хәтере һаҡланмаған. Беҙҙең "Альтамира" исеме нимәнән килеп сыҡҡан?" тигән һорауыбыҙға Климмер: "Бер ҡалҡыулыҡ исеме - Альтамира, шуға мәмерйә лә шулай атала", - тиеүҙән ары китә алманы. Уларҙың боронғо тамыры онотолған, халыҡ хәтере юйылған.

**Әлеге ваҡытта Шүлгәнташ мәмерйәһенә арналған музей-ҡурсаулыҡ ойошторолған, тигәйнегеҙ...**

**Д. Ғәйнуллин:** Морат Туғай комплексында беҙгә ике бина бирҙеләр. Береһе эш өсөн ҡулланылһа, икенсеһе - музей. Музейҙың дүрт залы бар. Беренсеһе - Шүлгәнташ мәмерйәһен өйрәнеүсе ғалимдар тураһында мәғлүмәткә, уны өйрәнеү тарихына арнала. Икенсе зал Шүлгәнташ мәмерйәһе кеүек, уның сит илдәге аналогтарына бағышлана. Руфиньяк, Альтамира, Шове музейҙарының һүрәттәре лә икенсе залға урынлаштырылған. Өсөнсө бүлмәлә Шүлгәнташ мәмерйәһенең күсермәһен һәм шунда уҡ боронғо ысул буйынса буяуҙар эшләүҙе, боронғо кешенең һүрәт эшләп торған мәлен сағылдырған экспозицияны урынлаштырҙыҡ. Бынан тыш, Шүлгәнташ мәмерйәһенең бәләкәй макетының киҫелешен бирҙек. Мәмерйә бит ҙур, уның оҙонлоғо 3,5 км. Шуны матур итеп макетта эшләнек. 4-се зал иң ҡыҙыҡлыһы булып сыҡты. Беҙ ғалимдар, рәссамдар менән бер йыл буйы ошо залды нисек эшләү тураһында бәхәстәр алып барҙыҡ. "Урал батыр" эпосы менән Шүлгәнташтың уртаҡлығына арналған зал нисек булырға тейеш?" тигән һорау өҫтөндә оҙаҡ бәхәсләшкәндән һуң, ниһайәт, бер уртаҡ фекергә килеп, түбәндәге һынланышта был идеяны сағылдырҙыҡ. Был залды биҙәүгә һәр рәссам үҙ өлөшөн, үҙ тәҡдимен индерҙе. Мәҫәлән, һүрәт төшөрөлгән быялаларҙың төрлө төҫтәрҙә балҡыуын ғына алайыҡ. Был - яңы технология. Быялаларҙа Йәнбикә менән Йәнбирҙе һынландырылған. Уларҙың уртаһында бишек тора. Ул бишек - төпһөҙ. Төпһөҙлөгө - башҡорт халҡының тыуған, барлыҡҡа килгән урынының мәңгелек булыуына ишаралай. Был композицияла шулай уҡ тирмәнең көмбәҙе лә бар. Ул да символик мәғәнәгә эйә. Ошо урында Шүлгән менән Урал тыуырға тейеш. Унда шулай уҡ мәшһүр эпосыбыҙҙың төрлө бүлектәре, төрлө экспозициялар ҡуйылды. Башҡорт һәм рус телдәрендә текстар ҡуйылды. Ә фойела беҙ мәмерйә кешеләре дәүерендә беҙҙең эраға тиклем 18-13 меңъйыллыҡта ниндәй йәнлектәр йәшәгән - шуларҙың коллекцияһын һәм экспозицияһын, уларҙың ҡайҙа, нисек йәшәүҙәре тураһында аңлатҡан мәғлүмәттәр бирҙек.

**Европала мәмерйәләрҙе ҡәҙерләп һаҡлайҙар. Ә беҙҙә ниңә был дәрәжәлә түгел һуң ул һаҡсыллыҡ? Эш ниҙә? Бәлки, европалағылар матди яҡтан етешерәктер, шуға мөмкинлектәре лә киңерәктер?**

**Д. Ғәйнуллин:** Эш аҡсала ғына түгел шул. Халыҡтың мәҙәни кимәле юғары булырға, тәүҙә үҙеңдең тарихи ҡомартҡыларыңды һаҡлау тигән төшөнсә күңелдәргә инеп ояларға тейеш. Мәҙәни кимәл кешенең подъезының таҙалығынан да күренә. Өфө ҡалаһын матур ҙа матур, тиҙәр. Урамдар, эйе, матур. Тик подъездарҙа ниндәй генә яҙыу күрмәҫһең? Европала халыҡ бындай тәртипһеҙлеккә юл ҡуймай. Беҙҙә лә бөтөнләй насар тип әйтеп булмаһа ла, барыбер яҡшы яҡҡа үҙгәрергә тырышырға кәрәк. Халыҡты тәрбиәләп була ул: яҡшы яҡҡа ла, насар яҡҡа ла. Шуға, был юҫыҡта ҙур фәнни эштәр эшләп, музей комплексын төҙөп, беҙ халыҡты, атап әйткәндә, иң беренсе сиратта - балаларҙы тәрбиәләргә тейешбеҙ. Музей комплексы экспозицияһының 30-40 проценты балаларға тәғәйенләнгән. Балалар тарихты уйын аша өйрәнәсәк. Унда стеналары аҡҡа буялған, мәмерйә һымаҡ итеп эшләнгән зал буласаҡ. Балалар музейҙың төп өлөшө менән танышып сыҡҡас, күсермәләрҙе ҡарап, тарих тураһында бер аҙ мәғлүмәт менән танышҡас, әлеге бүлмәләге стеналарға буяуҙар ярҙамында мамонттар, аттар һүрәттәре төшөрә ала. Икенсе залда боронғо йәнлектәрҙең пластмассанан эшләнгән һөйәктәре урынлашасаҡ. Балалар уларҙы тотоп, йыйып ҡарай аласаҡ.

**Р. Әлибаев:** Сит илдә балаларҙың ошондай залдарҙа нисек уйнауын күҙәтергә тура килде. Балалар һөйәктән ҡурҡа, тип уйлаһаң, улай булмай сыҡты. Мин ул балаларҙы фотоға ла төшөрөп алдым. Төрлө музейҙарҙа төрлө ҡыҙыҡ нәмәләр уйлап сығарғандар. Ә беҙ, Алла бирһә, бөтә яңы-

***✓ Башҡорт солоғо музейын эшләргә йыйынабыҙ. Уның да проекты бик ҙур, ҡыҙыҡлы. Кеше бал ҡорто ҡиәфәтенә керә лә, "солоҡ" эсенә инеп китә. Солоҡ эсендә ҡорттар нисек йәшәй - барыһын да үҙ күҙҙәре менән күрә.***



лыҡтарҙы бергә йыйып, бер музейға туплаясаҡбыҙ. Беҙҙең музейҙа, ял һәм сауҙа комплекстарындағы кеүек, балаларҙы бер урында - уйын зонаһында ҡалдырып китергә лә мөмкин буласаҡ. Балаларҙы уйнатыу ҙа ойоштороласаҡ. Ә ата-әсәләр үҙ эштәре менән йөрөп килергә лә мөмкин. Бөтә уңайлыҡтар ҙа бар. Бер тапҡыр инһәң, ғаиләң менән оҙаҡ ҡына йөрөргә була. Бер залда экран ҡуйыла, экрандағы ысынбарлыҡҡа төрлө яһалма элементтар ҡушыла. Мәҫәлән, балалар экранда үҙҙәрен генә түгел, ә уларҙың "янында" йөрөгән төрлө хайуандарҙы күрә, уларҙы "һыйпай" ала. Ошондай экранлы бүлмәне сит илдә күреп ҡайттыҡ һәм үҙебеҙҙең музейҙа ла ҡулланырға булдыҡ.

**Д. Ғәйнуллин:** Эйе, бындай экранлы залдарҙы эшләүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ. Уларҙы эшләү өсөн теләк һәм оҫталыҡ ҡына кәрәк. Беҙ уны эшләргә бурыслыбыҙ. Сөнки, балаларға дөрөҫ кешеһе, рус мөхитендә үҫкән. Әммә ул ошо эшкә бик ҡыҙыҡһынып тотондо. Ул Хәйбулла районы Михайловка ауылында тыуып үҫкән. Ләкин башҡорт тарихын, башҡорт менталитетын белгән кеше. Музейҙың эске экспозицияһын ябай ғына итеп эшләмәҫкә, ә "Урал батыр" эпосы аша күрһәтергә кәрәклеген ул тәҡдим итте. Беҙҙең үҙенсәлек шунда. Сөнки, "Урал батыр" эпосында төрлө ҡатламдар бар: таш ҡатламы, бронза ҡатламы, урта быуаттар ҡатламы. Шуларҙы бергә үреп күрһәтһәк, ул, беренсенән, беҙҙең бындағы ерлегебеҙҙе лә нығытыу өсөн файҙалы. Был музейҙағы бөтөн материалдар аша башҡорттоң был ергә борон-борондан ереккән икәнлеген күрһәтәсәкбеҙ. Бөтә боронғо философиябыҙ ошо ер менән, ошо тәбиғи, тарихи ҡомартҡылар менән бәйле икәнлеген күрһәтәсәкбеҙ. Шул концепция минең үҙемә лә оҡшаны. Иң мөһиме, күптән түгел булып

**Р. Әлибаев:** Вертикаль буйынса ҡарағанда, комплекстың архитектураһы өс: "Урал", "Донъя" һәм "Шүлгән" өлөштәренән тора. Өҫ яҡта - аҡ төҫтә "Урал", уртала - "Донъя"ны символлаштырған быялалы ал яҡ, аҫҡы өлөштә - ҡара төҫтәге "Шүлгән" күләмле пространстволы композиция һынландырыла. Бинаның алғы күренеше, донъя ҡайһы яҡҡа нығыраҡ ауыша - шул яҡҡа китәбеҙ, тигән идеяны үҙ эсенә алған. Комплексҡа ингән урын да Шүлгәнташ мәмерйәһе ауыҙы һымаҡ итеп эшләнгән. Һул яҡта фонтан - ул мәмерйә эсенән ағып ятҡан күлдең һынланышы. Консоль, йәғни сыға биреберәк торған ҡулайлама - мәмерйәгә инеп киткән кеүек тойғо тыуҙыра. Эсенә инһәң, концепция буйынса, беҙҙе Шүлгәнташ мәмерйәһенең 1:100 масштабы менән эшләнгән, бөтөн экспозицияға һуҙылып киткән макеты ҡаршы ала. Был макетты урынлаштырыу ҡарары ла үҙенсәлекле килеп

**▸ Был эш ҡасаныраҡ тамам булыр, тип көтөлә?**

**Д. Ғәйнуллин:** Әле былар барыһы ла проект стадияһында. Ул бер генә көндә эшләнә торған эш түгел. Планға ярашлы рәүештә, дөрөҫ аҙымдар менән, сит ил эксперттары, Рәсәй археологтары менән кәңәшләшеп, алға барабыҙ. Был ашыға торған эш түгел. Мин һәр ваҡыт әйтәм: һүрәттәр 18 мең йыл элек төшөрөлгән дә, бөгөнгәсә һаҡланған, һаҡланып килә. Уларҙы реставрациялау эшендә лә, обьектты туризмға йәлеп итеү эшендә лә ашығырға ярамай. Әлбиттә, оҙаҡҡа һуҙырға ла ярамай..

**Р. Әлибаев:** Күптән түгелге Бөрйәндә үткән симпозиумға Андорранан килгән Гийаме исемле ғалим: "Мин был проектты француз теленә тәржемә итеп, Альтамира, Шове һәм башҡа мәмерйәләрҙең музей комплекстары директорҙарына күрһәтеп, уларҙан һеҙгә баһалама алып бирермен", - тине. Беҙ әле сит ил белгестәренең баһаһын да аласаҡбыҙ, тимәксемен. Тағы ла, археологтарға ла экспозиция материалын таратып бирәсәкбеҙ. Күсермәләрҙе эшләгән саҡта сит ил белгестәрен йәлеп итергә уйлайбыҙ.

беҙҙә бөтөн Волга буйы төбәге, хатта бөтә Рәсәй өсөн доминанта булырлыҡ объект ул музей. Беҙҙә 350 мең кешенән дә күберәк кеше килеүе мөмкин. Әгәр был объект төҙөлһә, уның янында инфраструктура ла үҫешәсәк.

**Д. Ғәйнуллин:** Бөрйән районында туризмды үҫтереү тураһында төрлө семинарҙар үткәрәләр. Беҙҙең уйыбыҙса, ошондай музей комплексын төҙөү - Бөрйән төбәгендә туризмды үҫтереүҙең иң төп проекты ул. "Якорь" проекты, тип атайбыҙ уны. Сөнки Шүлгәнташ бөгөн барыһын да тартып торған урын. Тәбиғәте өсөн генә түгел, ә мәмерйәнең үҙен күрергә теләгән өсөн килә кеше. Килгәс, улар йылғаһында һыу инә, ял базаларында ял итә. Был музей комплексын эшләү ошо төбәктә туризмды йәнләндереү, көсәйтеү өсөн эшләнә. Ошондай комплекс төҙөһәк, киләсәктә төрлө бизнес структуралары ла үҫешәсәк. Францияла, Испанияла ла шулай эшләнгән: музей комплекстары төҙөлә лә, эргәһенә инфраструктура үҙе йыйыла. Бында ла шулай: беҙ комплекс төҙөһәк, бүтән комплекстар төҙөләсәк, юлдар яҡшырасаҡ, һәм башҡалар.

**Р. Әлибаев:** Уның ҡарауы, хәҙер конкурентлыҡ көслө: Сочи, Байҡал, Кавказ бар, Ҡырым ки-






# ТӨҘӨЛӘСӘК МУЗЕЙ...

## киләсәккә илтер

тарихи тәрбиә биреү - беҙҙең быуындың иң төп бурысы. Бөгөнгө көндә кешелектең килеп сығыуы тураһында кем нимә генә һөйләмәй бит... Дин әһелдәре бер нәмә һөйләй, ғалимдар һәм тырнаҡтар эсендәге "ғалимдар" - икенсене. Кешелек, ысынында, ҙур тәжрибә туплаған, ҙур тарихи юл үткән. Тарихты беҙ балаларға матур итеп, аңлайышлы формала күрһәтә белергә генә тейешбеҙ. Ошондай музейҙарҙы күргән сабыйҙар, ҙурайғас, дини наҙанлыҡҡа дусар булмаясаҡ, уларға егерме миллионлап йыл барған эволюцияны инҡар иткән идеяны һеңдереүе ҡыйын буласаҡ. Беҙгә тормошҡа реаль күҙлектән ҡараған XXI быуат кешеләре кәрәк. Яңы быуын кешеһе - кешелектең, халҡының тарихын белгән кеше булырға тейеш...

**Р. Әлибаев:** Музей ошо төбәк археологияһына бағышлана. Унда кешелектең барлыҡҡа килеүен күрһәтеү маҡсатын ҡуймайбыҙ, ә беҙҙең төбәктә кешеләр нисек барлыҡҡа килгән икәнлеген күрһәтәбеҙ. Йәғни, хәҙерге Башҡортостан территорияһында 18 мең йыл элек үк кеше һүрәт төшөргән, тимәк, үҙ мәҙәниәтен тыуҙырған, тигән һүҙ. "Урал батыр" эпосындағы ваҡиғалар ҙа беҙҙең музейҙа иғтибар үҙәгенә ҡуйыласаҡ.

**Д. Ғәйнуллин:** Әлеге һанап үтелгән бөтөн концепцияны беҙҙең йәш тарихсылар, йәш архитекторҙар эшләй. Ниммәһе ҡыҙыҡ: эске концепцияны эшләгән егет - Николай Григорьев - рус үткән симпозиум ваҡытында беҙ Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, сит илдәрҙән килгән ҙур-ҙур фән әһелдәре - археологтар, тарих фәндәре докторҙары хөкөмөнә үҙебеҙҙең концепцияны тәҡдим иттек. Төрлө яҡлап фекер алышҡандан һуң, бөтәһенә лә ошо концепция оҡшаны һәм симпозиумдың резолюцияһында уны ҡабул итергә тигән ҡарар сығарылды. Был беҙҙең өсөн ҙур сыҡты. Мәмерйәне донъяла бер кемдең дә былай итеп күрһәткәне юҡ ине. Ул музейҙың бөтөн өлөштәрен дә бергә ялғай торған "ҡыҙыл еп" ролен үтәй. Макетта һүрәттәр урынлашҡан урындар күрһәтелгән. Мәмерйәнең ҡайһы бер өлөштәре күсермә итеп эшләнә. Музейға килгән кешеләр Йәнбикә менән Йәнбирҙе һындарын да күрә аласаҡ. Бында "Урал батыр" эпосын популярла-



***Вертикаль буйынса ҡарағанда, комплекстың архитектураһы өс: "Урал", "Донъя" һәм "Шүлгән" өлөштәренән тора. Өҫ яҡта - аҡ төҫтә "Урал", уртала - "Донъя"ны символлаштырған быялалы ал яҡ, аҫҡы өлөштә - ҡара төҫтәге "Шүлгән" күләмле пространстволы композиция һынландырыла. Бинаның алғы күренеше, донъя ҡайһы яҡҡа нығыраҡ ауыша - шул яҡҡа китәбеҙ, тигән идеяны үҙ эсенә алған. Комплексҡа ингән урын да Шүлгәнташ мәмерйәһе ауыҙы һымаҡ итеп эшләнгән. Консоль, йәғни сыға биреберәк торған ҡулайлама - мәмерйәгә инеп киткән кеүек тойғо тыуҙыра.***

баһа. Ситтән килгән ғалимдарҙың ҡарашы беҙҙе ҡанатландырҙы. Беҙҙең үҙебеҙҙең археологтар - Котов та, Савельев та был концепцияны дөрөҫ тип ҡабул итте. Ысынлап та, беҙ бында ябай музей тәҡдим итә алмайбыҙ. Ул милли музей ҙа, археологик музей ҙа түгел. Кеше килеп инеү менән, хатта яҡынлашыу менән, беҙҙең музейҙың бинаһы ул кешегә ниндәйҙер философик уйланыуҙар өсөн "ем" ташлай. Музей комплексының архитектураһына ла фәлсәфә һалынған. Рөстәм уны яҡшыраҡ аңлатыр.

штырыу маҡсаты ла күҙҙә тотола. Шулай уҡ музейҙа Шүлгәнташ һүрәттәре генә түгел, ә башҡорт халҡының тотош мәҙәниәте сағылыш табасаҡ. Күп кенә археологтар: "Мәмерйә музейы булғас, уны ҡараңғы итеп күҙ алдына килтерә инек, бындай концепцияны көтмәгәйнек", - тине.

**Д. Ғәйнуллин:** Шүлгәнташ - мәмерйә булһа ла, "Урал батыр" эпосы - ул тотош фәлсәфә бит инде. Ошо яҡтан ҡараһаң, уның музейы ла сикһеҙ, ҙур, иркен, матур булырға тейеш. Ул мәмерйә ҡараңғылығында булырға тейеш түгел.

**▸ Мәмерйәләрҙең күсермәләрен ни өсөн төҙөйҙәр?**

**Р. Әлибаев:** Францияләғы Шове мәмерйәһен генә алайыҡ. Әле ул мәмерйә ябыҡ. Уның музейы Францияның туризм ныҡ үҫешкән яғында түгел, үҫешмәгән яғында эшләнгән. Ни өсөн? Туризмды үҫтереү өсөн. Шаве музейын йылына 350 мең кеше ҡарай ала. Альтамира ла 350 мең кешегә иҫәпләнгән. Ә Шүлгәнташты йылына 35 мең кеше ҡарай. Ул 350 мең кеше - Европала бер генә доминанта түгел. Аҙым һайын музей ҙа, билдәле урын. Ә леп сыҡты... Уларҙа сервис бөтөнләй икенсе кимәлдә. Ә беҙҙә, күҙәтеүебеҙсә, халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуа: "Беҙ меңәр саҡрым ер үтеп килдек, ярай, мәмерйәне генә күрҙек. Бында тағы ниндәй ҡыҙыҡ нәмә бар һуң?" - ти күптәр.

**Д. Ғәйнуллин:** Беҙ Шүлгәнташта бер обьект менән генә сикләнеп ҡалмаясаҡбыҙ. Музей-ҡурсаулыҡтың территорияһы ҙур, унда Йылҡысыҡҡан күле янында Аҡбуҙатҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ. Әлеге көндә скульптор Өлфәт Ҡобағошовтың оҫтаханаһында ат һыны эшләнеп ята. Киләсәктә Аҡбулат ауылы эргәһендә башҡорт балына арналған Башҡорт солоғо музейын эшләргә йыйынабыҙ. Уның да проекты бик ҙур, ҡыҙыҡлы. Кеше бал ҡорто ҡиәфәтенә керә лә, "солоҡ" эсенә инеп китә. Солоҡ эсендә ҡорттар нисек йәшәй - барыһын да үҙ күҙҙәре менән күрә. Был проект тулыһынса әҙер, хәҙер финанс мәсьәләләрен хәл итеү өҫтөндәбеҙ.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Бөгөнгө әңгәмәнең һығымтаһы үҙенән-үҙе тел осона килеп торғандай: тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау өсөн иң тәү сиратта мәҙәниәтебеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ. Балаларыбыҙҙы дөрөҫ тәрбиәләргә тейешбеҙ. Үҙебеҙҙең ҡылыҡтарыбыҙға, ғәҙәттәребеҙгә иғтибарлы булырға тейешбеҙ. Әңгәмәсе егеттәр шуны һыҙыҡ өҫтөнә алды ла инде: "Тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау өсөн аҡса ла ул тиклем мөһим түгел: мәҙәнилек мөһим".**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.**

***✓ Мин шулай уҡ Кәбир менән Кәримдең бер төҫтәге ике кеше булыуына ла аптырайым. Бер иш үк, әммә икәү. Күсермә кеүек. Шуғалырмы, һәр ваҡыт икеһенә бер үк нәмә оҡшай һәм шул бер нәмәгә талашып, һуғышып ғүмер итәләр.***

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# САҠ МЕНӘН СУҠ



– Ҡороғорлар! Сәнселгерләр! Ҡайҙа шул эт балалары?!

Барлығы дүрт класс һәм бер коридорҙан торған кескәй мәктәптең һәр бүлмәһенә асыҡ ишетелде был һөрән. Яңы ғына туҙан туҙҙырып парталар араһында сабышҡан балалар йәшен һуҡҡандай урындарыбыҙҙа ҡатышып ҡалабыҙ ҙа, "Йә инде, тағы ниндәй эш боҙғандар былар" тигән шелтәле лә, ҡурҡынған да ҡараштар менән игеҙәктәргә төбәләбеҙ. Ә тегеләрҙең беҙҙең кеүек бөршәйеп торор хәле юҡ, кемуҙарҙан йәшенергә ташланалар. Береһе түңәрәк тимер мейес артына өйөлгән сей ҡайын утын артына һикерһә, икенсеһе кластың мөйөшөн таҡта менән бүлеп яһаған китапханаға инеп ҡаса. Ул арала ишек һелкетә тартып асыла ла:

- Йәшәмәгерләр! Этләр! - тип һамаҡлап, малайҙарҙың әсәһе, дәү кәүҙәле Әсмә инәй килеп тә инә. Баҫҡан урындарыбыҙҙа таш булып ҡатҡанбыҙ, тегеләр йәшенгән яҡҡа күҙ алмабыҙҙы ла шылдырып ҡарап, бер ауыҙ һүҙ өндәшә алмайбыҙ. Һәр хәлдә, мин шулай. Ҡурҡам ошо инәйҙән. Бигерәк тә игеҙәктәрҙең унан ҡурҡмағанынан ҡурҡам. Нисек итеп шундай уҫал әсәйҙән дә шөрләмәҫкә мөмкин?..

Әсмә инәй улай-былай күҙ йүгертеп, класты бер байҡап сыға ла, малайҙарының мейес артындағыһын аңғарып ҡала һәм тос йоҙроғон хәле еткәнсе һуҙып, тегене төймәксе итә. Тик утындар аша ҡулы етеңкерәмәй, ахыры. Бына ул һис аптырап тормай, түрҙә элеүле торған байраҡты йолҡоп алып, шуны һөңгө итеп түңәрәк мейесте әле был, әле теге яҡтан көжгөй башлай. Ә тегендәге тотҡон шарҡылдап көлә-көлә әле бер, әле икенсе яҡҡа ырғый. Шул ғына ла етмәй, шайтан, әсәһен үсектереп эләкләшеп маташа:

- Теймәне битәлүк! Әһә-һә, теймәне!

Был мажара әсәй кеше тамам көйөп-ярһып арығансы дауам итә. Ахырҙа, ул байраҡты тағы бер киҙәнеп, шул мөйөшкә ҡарай осора ла, "Ер йотҡорлар! Йәлсемәгерләр!" тип ҡарғана-ҡарғана, гөп-гөп баҫып сығып китә. Ниһайәт, беҙ ҙә иркен тын алып ебәрәбеҙ. Уҡытыусы апайыбыҙ ҙа килеп инә. Ул да, моғайын, Әсмә инәйҙең ғауғаһынан ҡурҡып, уҡытыусылар бүлмәһенән сыға алмай ултырғандыр. Унан хатта директор ағай ҙа шикләнәлер ул, тип уйлайым. Ҡурҡмаһа, уҡыусыларын яҡлашырға инер ине лә инде.

- Нимә сығарҙығыҙ тағы? - тип һорай Зәлиә апай шым ғына игеҙәктәрҙең һыңары булған Кәбирҙән.

- Әллә! - тип ауыҙ йырып, яурынын ғына һикертә тегеһе.

- Һин нишләнең? - уҡытыусы китапхана кәштәләре аҫтынан ап-аҡ саң һөртөп сыҡҡан Кәримдең өҫтөн ҡағыша.

- Әллә, - ти быныһы ла.

- Кемгеҙгә эләкте? - апайыбыҙ малайҙарға алмаш-тилмәш ҡарап ала.

- Эләкмәне! Берҙе лә! - мейес артында һөжүм ҡабул иткән Кәбир сер бирергә теләмәй. - Әсәй был яҡтан тыс-тыс, мин теге яҡҡа фью-фью! - Шаталаҡ малай алыштарын йүгереп йөрөп мажара итеп күрһәтеп бирә. Хәҙер инде уға ҡарап, баяғынан ҡыҙыҡ табып көләбеҙ. "Шауламағыҙ", тип беҙҙе ураған һайын тыйып торһа ла, апайыбыҙ ҙа ауыҙын саҡ баҫып тыйып тора.

Икенсе көн был ғауғаның сәбәбен белдек: малайҙар йәшелсә баҡсаларын япмай киткәндәр ҙә, уңыштарын мал инеп тәләфләгән. Көҙгәсә тәрбиәләп үҫтергән йәшелсәләрҙе инде йыйып алыр ваҡытта һыйырҙан ашатһаң, әлбиттә, кемгә лә эләгер ине, тик башҡа берәүҙең әсәһенең мәктәпкә килеп етерен күҙ алдына килтерә лә алмайым.

* * *

Кәбир менән Кәрим минән ике йәшкә ҙурҙар. Шулай булһа ла беҙҙең кластарҙы бер бүлмәлә уҡыттылар. Уҡытыусы апайыбыҙ ҙа бер. Был ике малай шул тиклем тиктормаҫ, шул хәтлем шуҡ. Көн һайын булмаһа ла, көн аша нимәләр сығарып ҡына торалар. Йә тәҙрә яралар, йә берәйһен илаталар, ручкаһын һындыралар, китабын йырталар, уҡытыусыны тыңламайҙар, һис юғы, тас-тос килеп үҙ-ара һуғышып китәләр. Зәлиә апай дәрестәр буйына "Кәбир! Кәрим! Кәбир! Кәрим!" тип кенә тора. Бер ҡолағынан инә лә, икенсеһенән сығып та китә тегеләрҙең. Баштараҡ, уҡытыусы апай, беҙҙең ауылға яңы килгән сағында, ҡурҡытыр өсөн игеҙәктәрҙең әсәләрен саҡыртып ҡарағайны. Йәнәһе, оялта, тәрбиәләй инде. Әммә Әсмә инәй килеп: "Оятһыҙлар! Сәсрәгерләр!" - тип, ике малайын парта аҫтына төшөп йәшеренгәнсе тупылдатып туҡмап ташлағас, бик уңышһыҙ эш эшләгәнен аңланы. Хәҙер нимә генә булғанда ла тиктормаҫтарҙың әсәләренә өндәшмәй ҙә бит, тик Әсмә инәйҙең енләнеп килеп китеүенә форсаты ла аҙ сыҡмай тормай шул. Бер-ике тапҡыр уҡытыусы әсәләре инеп килгәндә күреп, үҙе малайҙарҙы ҡасырҙы әле. Әсмә инәйгә ағарынып-күгәренеп: "Теүәлиткә тип һорап сыҡҡайнылар", - тигән булды. Инәй ишек төбөндә килеш кенә: "Ҡороғорлар! Шифанирҙа ятҡан өр-яңы түл менән балыҡ һөҙгәндәр ҙә йәшереп ҡуйғандар, яңы таптыҡта йөрөһәм, килеп сыҡты. Дөмөккөрләр!" - тип, ҡулына йомарлап тотҡан ала-сола төргәкте күтәреп күрһәтә лә малайҙары артынан китә. Әсәләре сығып китеүгә, шкафтың ишеге шар асылып, унан даһыр-доһор булып күҙҙәре баҙлап игеҙәктәр килеп тә сыға. Ғәйептәрендә эштәре лә юҡ, һуғышып маташалар:

- Апай, Кәбир мине семтеп тик тора!

- Алдай, үҙе...

- Нишләп әсәйеңдең түленә тейҙегеҙ? - Апай тегеләрҙең ҡулдарынан һелкетә тартып алып килеп класс алдына баҫтыра. - Нишләп һеҙҙең ҡулығыҙ тик тормай, ә ?..

Малайҙар шулай булырға тейеш булғанса күкрәктәренә еткәнсе баштарын эйәләр ҙә торалар. Ә аҫтан ауыҙҙары йырыҡ, күҙҙәре ялт-йолт. Апай ҡыңғырау шылтырағанса әсәйҙәрҙе тыңлау һәм эш боҙмау хаҡында вәғәз уҡый. Ул сығып киткәс тә, Кәбир менән Кәрим парталарҙы шылдырып ҡуйып, өҫтәренә баҫып, кем оҙонораҡ һикерә, тип ярыша башлай.

* * *

Әсмә инәйҙән ҡурҡыуым хаҡында әйтеп үткәйнем инде. Әммә уның миңә бер ваҡытта ла ҡаты ҡағылғаны булманы. Киреһенсә, магазиндамы, медпункттамы тура килгәндә, "тәнәйләр, ҡыҙыҡайлар", тип арҡамдан тапап һөйөп ебәрә. Әллә ул малайҙарҙы ғына яратмай микән, тип уйлайым. Игеҙәктәрҙең инде үҫмер ҡорона ингән өс оло апаһы бар, уларҙы иһә әрләгәндәрен ишеткәнем дә, күргәнем дә юҡ. Был Кәбир менән Кәрим үҙҙәре инәйҙе шулай сығырынан сығаралыр ул. Шуға ла урам буйлап "Ҡороғорлар! Сәсрәгерләр! Этләр!" тип әрләп эҙләп йөрөйҙөр инде. Миңә иһә инәйҙең һөйләшеүе ҡыҙыҡ. Беҙҙең яҡта берәү ҙә уның кеүек "ларләр" тип әйтмәй, киреһенсә, "эштәп, таштап" тип тапап һөйләшәбеҙ. Инәй уҫал булһа ла бик матур әрләшә кеүек күрәм. Өләсәйемә шуға: "Әсмә инәй хәтәр ҡыҙыҡ әрләй, ивет", - тиһәм, ул: "Кит шуны, үҙ балаларын юҡ өсөн туҡтауһыҙ ҡарғап тик йөрөй, инә ҡарғышы ятмай буламы, ята инде ул. Үткәндә лә әйттем әле үҙенә, тәки аңдамай... Саҡ менән Суҡ итмәксеме шуларын", - тип һуҡрана.

Мин шулай уҡ Кәбир менән Кәримдең бер төҫтәге ике кеше булыуына ла аптырайым. Аптырамаҫлыҡмы һуң, бер иш үк, әммә икәү. Күсермә кеүек. Шуғалырмы, һәр ваҡыт икеһенә бер үк нәмә оҡшай һәм шул бер нәмәгә талашып, һуғышып ғүмер итәләр. Был нәмә китап, ручка, туп йәки хатта хеҙмәт дәресендәге бер таҡта ла булырға мөмкин. Ололарҙан берәйһе айырмаһа, улар сәғәттәр буйына ла туҡтамайса көрмәкләшә алалар. Инде хәлдәре бөтөп, саҡ аунашып йөрөйҙәр, әммә һөҙгәк тәкәләр ише береһе лә артҡа сигенмәй. Бына шундай малайҙар улар игеҙәктәр.

Улар тыуғанда ла ҡыҙыҡ хәл булған. Әсәләре бәпәйгә ауырып киткәс, өс апайы алғөйҙә көтөп ултырған. Бына фельдшер бәпәйҙе төргәккә төрөп алып сығып, ҡыҙҙарҙың олоһона: "Бына һиңә бәпәй",- тип тотторған да инеп киткән. Бер аҙ ваҡыттан тағы ла бер төргәк алып сығып, уртансы ҡыҙға: "Бына һиңә лә бәпәй", - тип биргән. Унан торараҡ килеп сыҡһа, өсөнсө ҡыҙ: "Миңә нишләп бәпәй юҡ?" - тип ҡысҡырып илап ебәргән, ти. Быны ла миңә өләсәйем һөйләгәйне. Теге икәү кеүек өсөнсө малай ҙа тыуһа, нимә булыр ине икән?

Ул игеҙәктәрҙең ҡылғандарын һәм ҡыланғандарын һөйләп кенә бөтөп булмаҫтыр. Әле хәрефтәр өйрәнгән генә сағыбыҙҙа улар уҡытыусыбыҙҙы бер ағартыр, бер ҡыҙартыр ине. Шулай "Ү" хәрефен үтәбеҙ. Апай беҙгә ошо хәрефе булған һүҙҙәр табырға ҡуша. Кәбир менән Кәрим үҙ кластарындағы миҫалдарҙы сисә алмаһалар ҙа, беҙгә, бәләкәстәргә, ирек көн бирмәйҙәр. Кемуҙарҙан белгәндәребеҙҙе әйтәбеҙ тип ҡулдарҙы йәлпелдәтәбеҙ:

- Апай, мин! Апи-пи-пи-пи!

- Апи-пи-пи! Апи-пи! - Кәрим бөтәбеҙҙән дә нығыраҡ пипелдәп, оҙон ҡулын төшөрмәй ҙә ҡуя.

- Әйҙә, әйт һуң, - ти бынан ҡотола алмаҫын аңлаған уҡытыусы.

Кәрим һикереп тора ла, бар класты яңғыратып ярамаған һүҙҙе һуҙып ебәрә:

- Кү-ү-ү..!

- ...

Бер шулай иртәнсәк мәктәптә дәрестәр башлауға ҡыңғырау шылтыратайым тиһәләр - тапмайҙар. Иҙән йыуыусы, мейес яғыусы һәм бер үк ваҡытта ҡыңғырау шылтыратыусы ла булған Фатима инәй теге бәләкәс кенә еҙ шылтыраҡты эҙләп арманһыҙ булды. Хатта дүрт кластағы һәр парта аҫтын тикшереп сыҡты. Уға эйәреп, беҙ ҙә, аҙаҡ уҡытыусылар ҙа эҙләште. Юҡ ҡыңғырау! Ахырҙа, дәрестәрҙең башланыуын һәм бөтөүен белгертеү өсөн шунда коридорҙа ултырған һыу багына аҫҡыс менән шаҡылдатып һуғып торҙолар. Тораҡ малайҙар араһында ниндәйҙер шыш-быштар китте. Шыбырлашыуҙарынан "Кәбир-Кәрим", "ҡыңғырау" тигән һүҙҙәр айырым-асыҡ ишетелеп ҡалғас, уҡытыусы апайыбыҙ быларҙы ҡыҫымға алды:

- Йә, әйтегеҙ, кемдә ҡыңғырау? Кем алған?

Тегеләр баштарын эйеп китеп шыма, ҡаш аҫтарынан ғына күҙҙәр йүгерешә. Унда-бында пырхылдап көлөп ебәрәләр.

- Хәҙер Рәйел ағайҙы саҡырам, ҡолағығыҙҙы шытырлатып борһа, көлкөгөҙ яңырыр!

Быныһы инде көлкө түгел. Директор Рәйел ағай ысынлап та күп һөйләшеп тормай. Ҡолаҡтарҙы (малайҙарҙыҡын ғына, әлбиттә) ҡыпһыуыр бармаҡтары менән эләктереп алып, будильник борғосо кеүек итеп бора ла ҡуя. Шунан тегеләрҙең ҡолаҡтары ҡып-ҡыҙыл булып ҡарпышайып китә. Ҡолаҡтарға барып етмәҫ борон, ағайҙың бер төҫөнән, ҡалын тауышынан, һуҡ бармағын өҫкә күтәреп янауынан уҡ тәртип боҙоусылар бөршәйеп төшә. Хатта урамда теге оста Рәйел ағайҙың килгәне күренһә, малайҙарҙың эш боҙғаны ла, боҙмағаны ла йүнәлештәрен үҙгәртеп, икенсе яҡҡа һыпыртыу яғын ҡарай.

Әле лә, директор ағайҙың исемен ишеткәс, яңы ғына пырхылдашып маташҡан малайҙар ысынлап тыныслыҙланды, берберeһенә "һин әйт" тигән мәғәнәлә терһәктәре менән төртөштө. Кәбир менән Кәрим иһә әле был, әле икенсе яғына боролоп, аҫтан ғына йоҙроғон күрһәтте, йәнәһе, әйтеп ҡарағыҙ, тәнәфестә кәрәгеҙгә бирербеҙ. Бөтөн был әкәмәтте күҙәтеп ултырған апайыбыҙ Кәбир менән Кәримгә алға сығып баҫырға ҡушты ла, үҙе тегеләргә яҡын уҡ килеп торҙо, баштарын күтәреп, күҙҙәренә ҡарарға тырышты. Тегеләр апайҙан һирпелгән һиҙелер-һиҙелмәҫ татлы хушбуй еҫенән, елкәләренә уның йомшаҡ ҡулы ҡағылыуҙан тағы ла нығыраҡ уңайһыҙланды һәм баштарын шаҡарып та күтәрмәҫлек итеп һәлпәйтте. Былай ҙа көсө етмәҫен аңлаған апай һуңғы сараға бармаҡсы булды:

- Тәк - все! Әсәйегеҙҙе саҡыртам хәҙер! Әйтегеҙ! Ҡайҙа ҡыңғырау?

Хәҙер инде ҡыҙҙар ҙа ҡурҡты. Ҡалай ҙур бола сыҡмаҡсы!

- Йә - көтәм. Өскә хәтле һанайым да, Хәсән, һин хәҙер йүгереп барып әсәйҙәрен алып килерһең.

Былдай ҡурҡыныс йөкләмәнең үҙ елкәһенә ятырға торғанын ишеткән Хәсәндең түҙеме бөттө һәм ул әсе тауыш менән сайылдап уҡ ебәрҙе:

- Давай әйтегеҙ! Атыу үҙем!

- Бе-ер! Ҡайҙа ҡыңғырау? Ике-е-е...

- Кәзәлә...

Был яуаптан апайыбыҙ бер килкегә телһеҙ ҡалды.

- К-кә... Ниндәй кәзәлә?

- Хәҙисә әбейҙең ҙур имсәкле ала кәзәһендә.

Ятып көләбеҙ.

- Шымығыҙ! - апайҙың шаярыу ҡайғыһы юҡ, ул тамам ҡыҙҙы. Шым булабыҙ. - Нисек ул кәзәгә барып эләкте, аңламайым!

Хәҙер инде игеҙәктәргә барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп биреүҙән башҡа сара ҡалмай.

- Кәбир кисә дәрестән һуң ҡыңғырауҙы урланы ла...

- Алдай! Кәрим үҙе!

- Э-э! Һин алайыҡ тинең!

- Алдаҡсы, һин кеҫәңә тыҡтың!

- Шым! - Апай бәләкәс кенә йоҙроғо менән өҫтәлгә туҡылдатҡанса һуға ла, ауыртыуҙан, матур танауын сирып, ҡулын һелкеп тора. - Алдығыҙ - шунан?

- Ҡайтып бара инек, Хәҙисә әбейҙең кәзәһе китеп бара, имсәге ҙу-ур ине, беҙ уны әҙерәк һауып ҡараныҡ та, шан...

- Йә, шунан?!

- Шан Кәрим бер йүкә табып, ҡыңғырауҙы кәзәгә тағып ебәрҙе...

- Һин!

- Тәк, етте! - Апайыбыҙ ҡупшы туфлийҙарының үксәһенә ныҡ баҫып, кластан сығып уҡ китә лә, күп тә үтмәй, директор ағайҙы эйәртеп килеп тә инә. Игеҙәктәр хәҙер инде шымыраҡ тауыш менән әлеге һөйләгәндәрен ҡабатлай. Ағай тегеләр һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән, икеһенең дә ҡолағын еңел генә итеп бороп та ҡуя. Шайтандарҙың ауыҙҙары асыла ла, өндәре сыҡмай. Директор ҡолаҡ борғанда ҡысҡырыу йә илау тыйыла.

**(Дауамы бар).**

✔ ***Мөхәббәт кешегә Хоҙайҙан бирелгән бүләктер, тим. Мөхәббәтһеҙ кеше роботҡа оҡшаш түгелме ни: ул осҡонһоҙ, ялҡынһыҙ, тере көүҙә, тере мәйет! Ошо күктән төшөрөлгән мөхәббәт арҡаһында аңлы кешегә әйләнгән.***



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# КҮҢЕЛДӘГЕ САФЛЫҠ...

## йәрҙе, илде, халҡыңды, донъяны яратыуҙан ул

**Яҙыусы һәр һорауға тапҡыр яуап бирә ала, яуабы менән уйландыра, сәмләндерә һәм ғәмләндерә торған кеше ул. Ошо рубрикала беҙ ҙә әҙиптәребеҙгә ябай булмаған һорауҙар биреп, уларҙың фәлсәфәүи фекерләүҙәрен тыңлап, аң һәм йөрәк төпкөлдәрен ҡуҙғытып алайыҡ, тинек. Тәүге әңгәмәгә билдәле шағирә Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА килде.**

➔ **Һеҙ үҙегеҙҙең ғүмерегеҙҙә атҡара торған төп эшегеҙҙе атҡарҙым тип уйлайһығыҙмы?**

- Ғүмерҙең төп эше, тинегеҙ. Бер ҡатлы ғына һорау түгел был. Уға фәлсәфәүи яуап кәрәктер. Һорауҙың асылы шунда: ғүмерҙе нимәгә арнап йәшәргә? Кешенең ерҙә йәшәүенең мәғәнәһе нимәлә? Тәғәйенләнеше? Бағланмышы? Нисек итеп ялған ҡиммәттәргә алданмаҫҡа? Мәҫәлән, Ғайса бәйғәмбәр кешелектең барса гонаһтарын үҙенә алып, уны һәләкәттән ҡотҡарыу өсөн йәнен фиҙа ҡылған. Шуға ла беҙҙең языҡтарыбыҙҙың хаҡы түләнгән. Йә бына үҙебеҙҙең Урал батырҙы миҫалға алһаҡ, уның төп эше, йәшәү маҡсаты - үлемдең үҙен үлтереү, кешеләрҙе үлмәҫ йән ҡылыу. Урал үҙ үлеме менән үлеп кенә үлемһеҙ була алыуҙы иҫбатлай. Остар тоташ: тыуым - үлемдән, үлем тыуымдан тыш була алмай. Кеше күп ғүмерле. Тән үлә, йән иһә - мәңгелек. Йәндең мәңгелеге - ошо түгелме үлемһеҙлек сере? Урал батыр быны яҡшы аңлай, шуға ла үлемде һайлай: уртындағы ғүмер һыуын үҙе өсөн файҙаланмай, уны йотмай, ә кешелек торлағы булған ергә, тәбиғәткә бөркә.

Был донъяла алдатҡыс нәмәләр күп. Бәндәләр иллюзияға бирелеүсән. Мәҫәлән, беҙ үҙебеҙҙе тән итеп тоябыҙ. Әммә кеше тән генә түгел. Беҙҙең күҙгә күренмәгән "тәндәребеҙ" бар. Тән үҙе генә - ул иллюзия. Беҙҙең белем күп кәмселектәргә эйә. Шуға ла кешеләргә хаталаныу хас. Беҙ бөтөндәрҙе алдарға һәләтле. Йәки үҙебеҙҙе аҡыллы итеп күрһәтергә теләйбеҙ. Йәнә: беҙҙең күп нәмәне тойомлауыбыҙ камил түгел: күренмәгәнде күрә алмайбыҙ. Мәҫәлән, ҡояш беҙҙе диск рәүешендә күренә, ғәмәлдә ул күп күк есемдәренән ҙурыраҡ. Шуға ла кешенең ерҙә йәшәүенең бер маҡсаты - камиллаша барыуҙыр, тип уйлайым.

Кеше, әлбиттә, үҫемлек тә, ҡош та, балыҡ та, минерал да түгел, ул - һөтимәр хайуандың бер төрө. Әммә аңлы төрө. Шуға ла кеше маҡсаты хайуандыҡынан ныҡ айырыла. Йыһан өсөн кеше мөһимерәк. Шуға ла кешегә юғары бурыстар, ҡылған ҡылынмыштары өсөн ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелгән. Шул яуаплылыҡтың берене - тәбиғәт ҡанундарын боҙмау. Бер генә хайуан да тәбиғәт ҡанундарына ҡаршы килмәй, шуға ла улар гонаһһыҙ. Ә кеше Әҙәм ғәләйессәләм замандарынан алып гонаһлы. Тәбиғәттең үҙендә яуызлыҡ юҡ, уны беҙ, кешеләр, тыуҙырмыштыр. Шуға ла кешенең бурысы - Юғары Илаһтың хакимлығын таныу. Аллаһы Тәғәлә урынлаштырған ҡағиҙәләргә буйһонмау - кеше өсөн һәләкәтле. Йыһандағы барса йәнле һәм йәнһеҙ нәмә - Аллаһтыҡы, кешенеке түгел. Кеше лә - уның продукты, уның иң һоҡланғыс ҡаҙанышы. Кеше Алла булып ҡыланмаҫҡа, үҙ урынын белергә бурыслы. Минең дә ерҙә йәшәүемдең мәғәнәһе ошолор. Төп эшем - ғәләм ҡанундарын төшөнөү, аңларға тырышыу. Ошо юл менән үҙ шәхесемде үҫтереү. Ҙурҙан алып әйткәндә инде...

➔ **Беҙҙең хәтерҙә әле: "Шоңҡар" журналын һеҙ үҙегеҙҙең фатирығыҙҙа сығара башлағайнығыҙ. Халыҡ өсөн шәхсән фиҙаҡәрлек ниҙән килә?**

- Был тойғоноң миңә ниҙән, ҡайҙан килгәнлеген мин аныҡ ҡына атап әйтә лә алмайым. Ул миндә бар, булған һәм буласаҡ. Хәтеремдә, мәктәпкә уҡырға төшәһе йылды, был була 1955 йыл, уҡытыусылар, өй беренсә йөрөп, уҡырға бараһы балаларҙы барлап, ата-әсәләрҙән балаларын ҡайһы синыфҡа - рус йә башҡорт синыфынамы бирергә теләүҙәрен асыҡлап йөрөнө. Рус синыфына өгөтләүҙәре иҫемдә ҡалған. Әсәй ҡарарҙы минең ҡарамаҡҡа ҡалдырҙы. Мин башҡортса уҡырға теләк белдереп кенә ҡалманым, үҙем менән бергә уҡырға төшәсәк тиҫтерҙәремә йүгереп сығып киттем. Ул саҡта беҙҙең ауылда башҡортса уҡытыу һаҡланып ҡалды. Йә, шунан әйтеп ҡарағыҙ, ҡайҙан килгән мин сабыйға был милли тойғо? Әйтәйек, бына артабан. 11-се синыфҡа мине хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға саҡырҙылар. Интернат-мәктәптең ул саҡтағы директоры Төхфәт Аслаев, хәҙерге "Башҡортостан" гәзитендә минең тәүге шиғри шәлкемем баҫылып сыҡҡас (1965), атайыма хат ебәрҙе: "Ҡыҙығыҙҙы кеше иткегеҙ килһә, беҙгә уҡырға килтерегеҙ", тиелгәйне унда. Ҡайҙан килгән Төхфәт Аслаевҡа был фекер? Әлбиттә, милли тойғонан! Әйткәндәй, ул шәлкемдәге тәүге һәм минең үҙ ғүмеремдә яҙған тәүге шиғыр ҙа Салауат батырыбыҙға арналғайны. Мәктәп дәреслектәрендәге шиғырҙарҙан башҡа бер ни ҙә уҡымаған Таңһылыу нисек яҙған һуң был милли ҡаһарманыбыҙға арналған шиғырҙы? Бит ул саҡта мәктәптә Салауат Юлаев тураһында йүнләп уҡытмайҙар ҙа ине. Ҡайҙан килгән миңә был шиғыр? Белмәйем. Нисек уны яҙғанымды ғына иҫләйем. Уны мин бер тынала, һеңлеләрем һәм ҡустымдан селтәрле япма ябылған әсәй карауаты аҫтына ҡасып, селтәр аша төшкән шәм яҡтыһында иҙәнгә һуҙылып ятып яҙҙым. Шул шиғырҙан башланды ла инде шиғриәт иленә сәйәхәтем. Ә инде 1-се интернат-мәктәптә уҡый башлағас, тәүге дәрестә үк мин математика уҡытыусыһы Суфия Ҡотдос ҡыҙына ультиматум иғлан иттем. Ул мине таҡтаға саҡырғас, мин башҡортса һөйләйем, тинем. Яҙ формуланы, бында тел кәрәкмәй, тине уҡытыусы. Был хәл шулай уҡыу аҙағынаса дауам итте. Иҫемдә шул ҡалған: мин таҡта янына сығыуым була, класҡа завуч Мофаззаров тигән ағай килеп инә лә, шым ғына иң артҡы партаға ултырып, мин һөйләгәнде тыңлай. Мин хәҙер генә уның нисек итеп математиканан башҡортса һөйләгәнде тыңларға ингәнен аңлайым. Бит ул саҡта үк интернат, башҡорт интернаты тип аталһа ла, асылда, рус мәктәбе булған, унда башҡорт теленән башҡа бар фәндәр ҙә русса уҡытылды. Хәҙерге көнөбөҙгә бағайыҡ: ҡайҙа бар һуң ул рус теленән башҡа барса фәндәр ҙә башҡортса уҡытылған мәктәптәребеҙ? Юҡ улар! Өҫтәүенә, оптималләштереү һылтауы менән аҙнаһына бер нисә сәғәт кенә уҡытылған башҡорт теле дәрестәренә ҡоторонҡо һөжүм бара! Ҡайҙа барабыҙ?

Милли тойғо миндә, бәлки, атайымдың оҙон көйҙәрен тыңлап үҫкәндән барлыҡҡа килгәндер. Минең кескәй йөрәгемдең уларҙы тетрәнеп ҡабул иткәнен иҫләйем. Минең атайым Фаяз Шаһингәрәй улы Ҡарамышев 96-сы йәше менән барғанда вафат булды. Кеҫә телефонына яҙҙырып алдым - үлгәндә лә йырлап ятып үлде ул. Ә күптән түгел Юлай Ғәйнетдинов миңә уның башҡарыуында "Бейеш" йырын бүләк итте. Баҡтиһән, уны Башҡортостанға экспедицияға килгән венгр ғалимдары яҙҙырып алған икән! Фронтовик атайымдың үпкәһе бөрөү генә ине, шуға ла тынын бүлеп йырлай, әммә рух менән йырлай торғайны. Ғөмүмән, башҡорт йырҙары бит рух, хис, күңел менән башҡарыла, тауыш менән генә түгел. Шулай уҡ бейеүҙәребеҙ ҙә! Техника икенсел уларҙа.

Фиҙаҡәрлек тә милли рухтан килә. Миңә 90-сы йылдарҙа "Йәшлек" гәзитен ойоштороуҙа ҡатнашырға насип булды. Мөхәррир урынбаҫары булараҡ, баҫмаһың йөкмәткеһенә йөгөнтө яһау мөмкинлеген мин шундуҡ файҙаландым. Тап "Йәшлек" гәзитендә совет осоронан һуң тәү башлап Зәки Вәлиди, Муса Мортазин тураһында материалдар ойошторҙоҡ, Шәйехзада Бабичтың "Башҡорт халҡына көйлә хитап" әҫәрен, Әкрәм



Бейештең "Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше" китабын йыл буйы баҫтыҡ. Халҡыбыҙҙың милли рухын тергеҙеүҙә ҙур роль уйнаны ул йылдарҙа был баҫма. Унда эшләп йөрөгән йылдарымды иң бәхетле сағым тип иҫәпләйем. Сөнки тап ошо эштә минең ысын асылым ҙур киңнес кисерҙе. Ҡайҙан килде был киңнес? Әйталмайым.

Бәлки, ҡандан киләлер был тойғо. Мин бит башҡорттоң билдәле бейҙәре нәҫеленәнмен. Ҡармыш бей, уның улы Сәйет, уның улы Күгеш, уның улы Аҡсура, уның улы Ҡармыш баба, уның улы Аҡбулат, уның улы Аҡсолтан (Аҡкөбәк), уның улы Байслан, уның улы Ибраһим, уның улы Мөхәммәтйосоп (Йосоп майор), уның улы Солтангәрәй, уның улы Шаһингәрәй, уның улы Фаяз, уның ҡыҙы Таңһылыу. Был шәжәрә сылбырында башҡорт халҡының азатлыҡ көрәшендә ҡатнашҡан шәхестәр ҙә бар. 17-се быуат аҙағында Петр 1-сенең Аҙау диңгеҙе походтарында ҡатнашҡан тархан Ҡармыш бабаның атаһы Аҡсура, Зәки Вәлидиҙең "Хәтирәләре"ндә яҙылыуынса, 1661-1667 йылдарҙағы башҡорт ерҙәрен тартып алыуға ҡаршы күтәрелгән ихтилалда ҡатнашҡан. Ҡармыш бабаның улы Аҡбулат (17-се быуат аҙағы һәм 18-се быуат башы), шул осорҙағы башҡорт ихтилалдары етәкселәре ҡушыуы буйынса, ҡаҙаҡтарға һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн ебәрелә, әммә ҡайтышлай, карателдәр тарафынан тотолоп, язалап үлтерелә. Аҡбулаттың улы Аҡсолтан (Аҡкөбәк) карателдәрҙән тауҙарға ҡасып ҡотола һәм нәҫелебеҙҙе ҡоротмай дауам итә. Бәлки, шәжәрә ағасымдағы ошо кешеләрҙән киләлер миндәге фиҙаҡәрлек?

Оҙон тәфәккә төшеп китмәҫ өсөн, Рәсәй империяһы походтарында, атап әйткәндә, Балтик буйында Швеция менән һуғышта ҡатнашҡан Байслан Аҡсолтан улы, уның ейәне - минең атайымдың олатаһының атаһы, губернатор Перовскийҙың Һырдарья буйындағы Коканд ханлығы ҡәлғәһе Аҡ Мәсеткә булған походында ҡатнашҡан Мөхәммәтйосоп Ибраһим улы тураһында бәйән итеп тормайым. Улар ҙа бит ил маҡсаттарына хеҙмәт иткән. Тик ил маҡсаты, дәрәҫәрәге, илдәге хакимдар маҡсаты халыҡ маҡсатына тура килгәнме? Әгәр тура килмәһә, бына ҡайҙа ул ысын фажиғә! Күпме бабамдар золом ҡорбаны!

Яныраҡ ҡына туғандарым менән олатайым Шаһингәрәйҙең ҡәберен эҙләп таптыҡ. Нуриман районының бөгөнгө көндә юҡҡа сыҡҡан Ҡурансы ауылының тау башындағы зыяратында ята ул. Минең уны бер ҡасан да күргәнем булманы. Минең олатайыма, үҙенең атаһы Солтангәрәй кеүек, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеп, тыныс тормошта йәшәргә насип булмай, сөнки революция, граждандар һуғышы йылдары башлана. Шаһингәрәй, өлкән дүрт ағаһы менән берлектә, 1918 - 1930 йылдарҙағы барлыҡ кәмһетелеүҙәргә дусар ителә. 1918 йылда ҡыҙылдар тарафынан уларҙың барлыҡ мөлкәте тартып алына. Улар, террорҙан ҡасып, ҡаҙаҡ далаларына барып сыға. Әммә ҡырғын был яҡтарға ла килеп етә. Көс-хәлгә кире Маҡарға ҡайтып йығылғас, уларҙы, контрреволюционерға сығарып, йәғни хаҡһыҙға ғәйепләп, Стәрлетамаҡ төрмәһенә ябалар. 1926 йылда уларҙы республиканың Юғары суды аҡлай, ләкин был бер туғандар 1930 йылда йәнә золом ҡорбандарына әйләнә, уларҙы, был юлы кулак яһап, илдән һөрәләр. Олатайымдың өлкән ағалары Бәхтегәрәй, Арыҫлангәрәй, Сәлимгәрәй, Сәйеттәрәйҙе - ун, үҙен өс йылға Архангельск крайы Холмогорск ҡалаһына лагерҙарға ебәрәләр. Был тамуҡтан олатайым Шаһингәрәй генә иҫән ҡайта, ә уның дүрт ағаһы тәүге йылда уҡ аслыҡтан, һыуыҡтан, каторга хеҙмәтенән үлә. Уларҙың һөйәктәре, үҙҙәре кеүек үк мөңрәлгән кешеләрҙең һөйәктәре менән бергә, билдәһеҙ соҡорҙарҙа ята.

Олатайым, ҡоро һөлдәгә ҡалған хәлдә, срогын тултырып, 1933 йылда Маҡарға ҡайта. Ләкин уны шул уҡ айҙа тағы ла һөргәнгә, был юлы инде тотош ғаиләһе менән, Томск өлкәһенең Нарым крайына ебәрәләр. Был юлы өләсәйем Зәйнәптән кулак яһайҙар һәм олатайым, өләсәйҙән айырылмайым тип, биш балаһын алып, тағы һөргәнгә юллана. Аҙаҡ, Сталин үлгәс, минең олатайым, өләсәйем, уларҙың биш балаһы берәм-берәм һөргөндән ҡасып ҡайта. Олатайым хәҙерге Нуриман районы Сарва ауылында йәшәй башлай һәм шунда вафат була. Мин йөрәгемдә золом ҡорбандары булған барса бабамдар яҙмышына оло әрнеү йөрөтәм. Ул да миңә фиҙаҡәрлек тойғоһо бирәләр тим.

➔ **Мөхәббәт тойғоһона ҡарашығыҙ үҙгәрҙеме?**

- Ҡасандыр мин дә донъяға ғашиҡ бер ҡатлы ҡыҙыҡай инем. Ул ҡыҙыҡай, әлбиттә, һәр ваҡыт кемгәлер ғашиҡ ине. Тора-бара ул был ғашиҡлыҡты тәрән мөхәббәткә әүерелдерҙе, йәғни - йөрәгенә, шунан башына күсерҙе. Шулай итеп, ул тойғоларында нығынды, быуынға ултырҙы. Фәндә "эстетиль тукыма", йәғни һөйөү нервылары тигән төшөнсә бар. Ул кешелә эмоциональ интеллект тәрбиәләй. Ошо интеллект миндә лә барлыҡҡа килде, буғай. Ул - минең мөхәббәт сығанағым. Эстән балҡытып, яҡтыртып йәшәтеүсе көсөм. Миңә хәҙер яуапһыҙ мөхәббәт кәртә була алмай, сөнки һөйөү минең эсемдә, ә тышымда түгел. Әйтәйек, бына парашют, ул асылһа ғына үҙ бурысын үтәй, асылмаһа, кешене һәләкәт көтә. Минең күңелем хәҙер асылған парашют хәлендә. Йәки, бына шишмә. Ул ерҙе тишеп сыҡһа ғына шишмә була ала. Тишмәһә, һыу сыкмаясаҡ. Һөйөү - пәйҙәләнһә генә һөйөү. Ул - минең йәшәү сығанағым. Мөхәббәт кешегә Хоҙайҙан бирелгән бүләктер, тим. Кешенең йәне лә мөхәббәттән хасилдыр, тип уйлайым. Мөхәббәтһеҙ кеше роботҡа оҡшаш түгелме ни: ул осҡонһоҙ, ялҡынһыҙ, тере көүҙә, тере мәйет! Кешелек башланғанда кеше кейек хәлендәге зоологик тип булһа, аҙаҡ ошо күктән төшөрөлгән мөхәббәт арҡаһында аңлы кешегә әйләнгән. Һомосапиенс - ул гибрид, ул йән һәм тән берлеге. Һомосапиенстың бурысы - үҙенә күктән бирелгәнде, мөхәббәтте һаҡлау, үҫтереү, ҙурайтыу, ҡотҡарыу. Кем шул бурысты үтәй, шул ғына киләсәк өсөн иҫән ҡаласаҡ. Бит һомосапиенс та мәңгелек түгел, уны яңы кеше - плазмоид алмаштырасаҡ, ти ғалимдар. Йәғни, 6-сы раса кешеләре. Кешелектең был генерацияһы үҙ юлын түнәрәкләй. Кешелек яңы сифатҡа күсәсәк. Бындай күсеш дәүерендә күңелдә саф тотоу айырыуса мөһим һәм хәл иткес көскә эйә. Ә был сафлыҡты бары яратыу тойғоһо ғына бирә алалыр. Йәрҙе, илде, халҡыңды, донъяны яратыу...

*✓ Идеаль иртәнге аш сәғәт 6-нан 8-гә тиклем булырға тейеш. Емеш-еләкте көндөҙгө 16 сәғәттән һуң ашау ҙа зыянлы икән. Йоҡларға ятырҙан ике сәғәт алда бал ҡушылған һөт эсеү сәләмәтлеккә яҡшы тәьсир итә, ти ғалимдар.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЯРЛЫҠТЫ УҠЫЙ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртә - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Идеаль иртәнге аш сәғәт 6-нан 8-гә тиклем булырға тейеш. Емеш-еләкте көндөҙгө 16 сәғәттән һуң ашау ҙа зыянлы икән. Йоҡларға ятырҙан ике сәғәт алда бал ҡушылған һөт эсеү сәләмәтлеккә яҡшы тәьсир итә, ти ғалимдар.

■ Көньяҡ Калифорния университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ир-егеттәр йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә нығыраҡ бирешә икән. Белгестәр фекеренсә, шулай ҙа һуңғы тиҫтә йыл эсендә йөрәк ауырыуҙары сирҙәренә дусар булыусылар һаны күпкә кәмегән, был дөрөҫ туҡланыу, йоғошло ауырыуҙарҙы ваҡытында иҫкәртеү һәм башҡа факторҙар менән бәйле. Тик барыбер ҙә профилактика күберәк гүзәл затҡа яҡшыраҡ тәьсир итә, 13 үҫешкән илдә йәшәүселәрҙе тикшереп, ғалимдар шундай һығымтаға килгән. Был ир-егеттәр араһында тәмәке тартыусылар күп булыу менән бәйле, ти улар.

■ Ниндәйҙер йәрәхәт алған кешелә кортизол кимәле юғары икән, ул был хәлде иҫенә төшөргән һайын, хәтерендә уны яңынан кисерәсәк. Бына шуның өсөн дә йәрәхәттән һуң стресс кисереүселәр насар хәтирәләр менән оҙаҡ яфалана. Бохумдағы Рур университеты белгестәре тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға геометрик фигуралар күрһәткән. Ҡайһы бер фигураларҙы күрһәткәндә еңелсә электр тогы һуҡҡан. Икенсе көнөнә һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһына - кортизол, икенсеһенә составында бер ниндәй ҙә матдә булмаған "буш" таблеткалар биргәндәр. Өсөнсө көнгә белгестәр һынау үтеүселәрҙең нисә геометрик фигураны хәтерендә ҡалдырғанын асыҡлаған. Һөҙөмтәлә кемдәр кортизол ҡабул иткән, ток һуҡҡан фигураларҙы айырыуса яҡшы иҫләгән. Уларҙың тиреһенең токты үткәреү сифаты ла яҡшырған, был иһә эмоциональ кисерештәрҙең юғары булыуы тураһында һөйләй.

■ Бирмингем университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, тауар ярлыҡтарында артыҡ мәғлүмәт күп, һөҙөмтәлә һатып алыусылар яңылышып китеп, кәрәкле әйберен һайлай алмауы бар. Продукт тураһындағы айырым мәғлүмәттәр, мәҫәлән, уның массаһы, майҙар, тоҙ, шәкәр, калория күләме хаҡындағы яҙыуҙар, шулай уҡ теге йәки был матдәнең тәүлек нормаһын күрһәткән төҫлө схемалар кешеләрҙе яңылыштыра, ти белгестәр. Калория тураһында яҙмаһаң да була, сөнки калория һанауҙан файҙа юҡ, ти улар. Уның урынына клетчатка күләмен яҙыу урынлы булыр ине.

■ Спиртлы эсемлектәрҙе аҙ ғына ҡулланыу зыянлы түгел, киреһенсә, организмға был файҙалы, тип уйлаусылар хаталана. Австралияның яман шеш менән шөғөлләнеүсе бер ойошмаһы белгестәре асыҡлауынса, был ауыҙ ҡыуышлығы һәм тамаҡ яман шеше хәүефен арттыра. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, донъялағы үлем сәбәптәренең 6 проценты алкоголгә тура килә. Бигерәк тә бауыр зарарлана. Белгестәр әйтеүенсә, бауыр циррозы кешенең йыл дауамында эскән алкоголь күләменә бәйле барлыҡҡа килә. Даими эсеүселәр йышыраҡ зыян күрә, ти улар.

*ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

# ҠАТЫ ИКӘН ЙЫЛАН ҠАРҒЫШТАРЫ

**"Киске Өфө"нөң һуңғы бер нисә һанында Таңһылыу Баһауетдинованың "Ҡаты икән йылан ҡарғыштары" тигән материалы баҫылды. Уның яҙғандарын дауам итеп, мин дә бер нисә хәтирәм менән уртаҡлашмаҡсы булдым әле.**



Йыландар - тәбиғәттең серле лә, имәнесерәк тә йән эйәләре. Туҙбаш йылан кешеләрҙең ихата-баҡса тирәһендә лә осрай. Ә ни өсөн йорт тирәһендә ағыулы йыландар осрамай һуң? Тап шул туҙбаш йылан кешеләрҙең йорт тирәһен бүтән йыландарҙан һаҡлай, имеш. Шуға ла йорт тирәһендәге туҙбаш йыланды үлтерергә ярамай, тигән ышаныу йәшәй. Үлтерһәң, үҙеңә, зат-ырыуыңа бәлә-ҡаза килер, тиҙәр. Быны раҫлаусы миҫалдар бихисап. Т. Баһауетдинова улар тураһында тәфсирләп яҙҙы инде. Бына тағы бер миҫал. Беҙҙең ауылда йәшәгән берәүҙәрҙең өй нигеҙенән ике туҙбаш йылан килеп сыға. Ҡурҡып, тегенең берәүһен үлтерәләр. Үлтерергә ярамағанлығы аҙаҡ ҡына иҫтәренә төшә. Икенсе йыланды ғаилә башлығы Нөгөш буйына алып барып ҡалдырып китә. Шул көндө үк Ишембайҙан ата-әсәһен күрергә ҡайтып килгән ҡыҙҙары машина менән түңкәрелә. Ярай әле, имен ҡала. Тағы ла бер аҙ ваҡыттан ейәндәре ҡулын һындыра...

Туҙбаш йылан, ғәҙәттә, өй нигеҙендә ҡыҙынып ятырға ярата. Күптәр туҙбаш йылан саҡмай тип иҫәпләй. Элегерәк булғайны был хәл. Беҙҙең ауылдан бер малай салбар балаҡтарын төрөп, йылғаны кисеп йөрөгән ваҡытта аяғын һыу төбөндә ятҡан туҙбаш йылан саға. Уны Әүжән дауаханаһына оҙаталар, байтаҡ ҡына дауаланып сыға. Ололар, туҙбаш йылан гелән саҡмай, әммә үҙенең саға торған бер мәле була, ти торғайны. Был малай, күрәһең, туҙбаш йыландың шул мәленә тура килгәндер.

Еҙ йылан (тос йылан тип тә әйтәләр) хаҡында ла имеш-мимештәр таралған. Ололарҙың бесәндә, ғөмүмән, урманда көндөҙ йоҡларға ярамай, тос йылан кешене арбап, эсенә инә, тигәндәре хәтерҙә. Был мәлдә кеше төшөндә һыуыҡ ҡына һыу эскәнен күрә икән. Кеше һыуһап уяна, тиҙәр. Әгәр ҙә һыуһаған кешегә һыу эсермәй, алдына ултыртһаң, йылан һыу эсергә үҙе сыға, имеш. Әгәр сыҡмаһа, кешене йылан арбаусыға алып бара торған булғандар.

Ауылдашым Шәфҡәт Ғималетдинов бик матур сәскәле йылан күреүе хаҡында һөйләгәйне. Миңә лә, балаларыма ла теймә, тип ебәрҙем мин уны, тине.

Туҙбаш йыландың көн һыуығыраҡ булғанда урманда кешенең кейем еңенә, кеҫәһенә, хатта сискән итегенә лә инеп ята торған ғәҙәте бар. Бер шулай Волков утарынан ары силос һалып ятабыҙ. Вәли Ғүмәров курткаһын ереккә элеп торғайны, аҙаҡ уны кейергә итһә, ҡысҡырып ебәрҙе: еңендә туҙбаш йылан уралып торған икән. Икенсе көндө шул уҡ ереккә икенсе иптәшебеҙ ҙә кейемен элеп, эсенән йылан килеп сыҡты.

Өйөгөшкән саҡтарында бөтә йыландар бергә уҡмашып ята. Бындай хәлдәрҙе бер нисә тапҡыр күрергә тура килде.

Аҡ йыланды йыландар батшаһы тип йөрөтәләр. Уны бер тапҡыр ғына күрҙем. Нурғәле, Ишғәле тигән иптәштәрем менән бергә күрҙек. Осипов тигән урыҫтың өйөнөң нигеҙе сереп ҡойолоп, аҫтында ҡыуыш барлыҡҡа килгәйне. Шунда ярты метрҙан ҙурыраҡ оҙонлоҡтағы бер аҡ йыланды осраттыҡ. Оҙон ғына булһа ла, башҡа йыландарҙан нәҙегерәк ине. Беҙ уға теймәнек, уны үлтерергә ярамай икәнен белә инек. Ололар, аҡ йылан күрһәң, аҡ яулыҡ ташларға кәрәк, мөгөҙөн һалып китеүе ихтимал, тиҙәр ине. Аҡ йылан мөгөҙөн һалып китһә, шул кешегә бәхет ҡапҡаһы асыла, имеш. Әгәр ҙә уға тейһәң, бик әсе итеп һыҙғыра һәм эргә-тирәләге бөтә йыландар шул тауышҡа шыуышып килеп, аҡ йыланға тейгән кешегә һөжүм итәләр, тип әйтер ине ололар.

Йыландың кешене бәлә-ҡазаларҙан ҡотҡарып ҡалған саҡтары ла була икән. Ирле-ҡатынлы йәш ғаилә сабынлыҡтарында имсәк балаларының сәңгелдәген ағас ботағына элеп, сабыйҙарын йоҡлатып, үҙҙәре бесән сабырға китә. Байтаҡ ваҡыт үткәс, бәпестәрен ҡарарға килһәләр, сәңгелдәк бауы буйлап бер йылан төшөп барғанын күрәләр. Ҡурҡыштарынан, сәңгелдәкте һелкетә тартып алып, баланы бишеге менән бергә алып, ситкә йүгерәләр. Улар китеү менән шул тирәлә ер убыла һәм тәрән генә һыулы соҡор барлыҡҡа килә. Сәңгелдәк эленгән ағас та шуның төбөнә китә...

Йыландың өҫтөнә баҫмаһаң, йәғни уға зыян килтермәһәң, ул саҡмай, тиҙәр. Йәнә йылан тау битендә осраһа, үргә ҡарай ҡасырға кәрәк, тигән ышаныу ҙа йәшәй. Йылан ҡойроғон тешләп, аҫҡа табан тәгәрмәс һымаҡ тәгәрәп баҫтыра икән ҡорбанын.

Афғанстандағы һуғыш менән бәйле легендаға тартым тарих йөрөй халыҡ араһында. Бер совет һалдаты йылан балаларын ашатып йөрөгән. Улар һалдаттар йәшәгән палатка тирәһендәрәк кенә көн күргән. Бер көндө бала йыландарҙы ашатып йөрөгән сағында инә йылан килеп сығып, һалдатты баҫтырып алып китә. Һалдат автоматын да алырға өлгөрмәй, артына ла ҡарамай саба, ти. Шулай байтаҡ баҫтырышып барғас, инә йылан юҡ була. Һалдат арып-талып палатҡаһына ҡайтһа, иптәштәренең барыһын да дошмандар һуйып сыҡҡан, ти. Тимәк, инә йылан һалдатты ҡотҡарып ҡалыу өсөн ситкәрәк ҡыуып алып киткән.

Әүәле ауыл ҡарттары беҙҙең тирәлә бик ҙур йыландар йәшәүе хаҡында һөйләй торғайны. Миңә ете йәштәр самаһы булғандыр, ағайым Баязит, Ситдиҡов Рамаҙан, Халиҡов Йосоп Аҡһыйыр яланына бесәнгә киттек. Миңә лә бәләкәй генә салғы һаплап биргәйнеләр. Бер ваҡыт беҙҙең күршелә йәшәгән Анастасия Федорова тигән мәрйә шарылдап йүгереп килә. Уның бесәнлеге лә шул тирәлә, Нөгөш йылғаһы буйында ине. "Баҫырау ҙурлыҡ йылан күрҙем", тип ҡысҡыра үҙе. Килә торғас, әләгеп ҡолап китте, һыңар ҡатаһы ятып ҡалды. Беҙҙең эргәгә килеп еткәс, хәле бөтөп ултыра төштө. Ағайҙар бер-береһенә сәйер генә итеп ҡараштылар ҙа, теге йыланды күрергә киттеләр, бәләкәс булғас, мине эйәртмәнеләр. Оҙаҡламай, ҡоттары осоп йүгерешеп килделәр. Шул ваҡиға иҫкә төшөп, ул ваҡытта минән ҙурыраҡ та булғас, яҡшыраҡ хәтерләйҙер, тип, былтыр Йосоптан һораштым. "Йылан бик ҙур ине", тине ул. "Башы туҙбаштыҡына оҡшамағайнымы?" тип һорағас, "Ҡайҙа ти уға ҡарап тороу, баҫрау йыуанлыҡ икәнен генә самаланыҡ. Оҙонлоғо 5-6 метр булғандыр, К-700 тракторы тәгәрмәсе һымаҡ уралып ята ине. Беҙ ҡурҡыштан кире саптыҡ", тине ул.

Шул уҡ йылды Йосоп Хәҙисә апаһы менән Ҡоҙаш йылғаһы буйында бесән эшләгәндә тағы бер ҙур йылан күрәләр. Ул әрәмәлә бер муйыл ботағына уралып, икенсеһенә һуҙылып ҡыҙынып ятҡан була. Быныһы тегенеһенән саҡ ҡына ҡыҫҡараҡ була.

Харрасов Кирам бабай Нөгөш күпере тирәһендә, йәғни Әбей батша күперенән өҫтәрәк, Нөгөш йылғаһын быуып ятҡан бик ҙур йыланды күргән. Был хаҡта миңә Нәғимә апай Әхмәҙуллина һөйләгәйне.

Бикташ ауылынан (хәҙер был ауыл юҡ) күпкә түбәндә ҡамышлы, ылымыҡлы бер ҡолаҡ бар (йылға айырсаһы булып һыу йыйылып ятҡан ер). Ошо ҡолаҡтан бүрәнә йыуанлыҡ бер елле йылан сығып, ҡаршы яҡтағы тауға үрмәләгәнен тракторсылар күреп, ҡоттары осоп ҡасалар. Ғәлиәкбәрҙән дә шул уҡ ҡолаҡтан сығып тауға үрмәләгән йыландың юлын күреүселәр була. Күрше Яңы Һәйет (Ишембай районы) ауылында ла ҙур йылан эҙҙәрен күреүҙәре тураһында һөйләгәндәрен ишеткәнем бар.

60-сы йылдар аҙағында гәзиттәрҙә Вьетнамда булған бер хәл хаҡында яҙғайнылар. Бер ауылдың малдары юғала башлай. Малдарын эҙләп сыҡҡан кешеләр ҙә кире ҡайтмай. Бер тәжрибәле һунарсы карабины менән сығып китә һәм ер гиҙеп йөрөй торғас, бик ҙур йыланға тап була. Бер күл ярында башын ағасҡа һалып йоҡлап ята ти теге. Уңайлы урын һайлап, йыланға ата башлай һунарсы. Йылан уяна, төрлө яҡҡа бәргеләнә, үҙенә һөжүм иткән кешене эҙләй. Һунарсы гел тегенең башына төҙәп ата. Ун алты тапҡыр атҡас ҡына үлә йылан. Уны ике буйвол менән һөйрәп алып ҡайталар. Тимәк, аждаһа, юха хаҡындағы әкиәттәр буш ерҙә тыумаған икән, тиергә нигеҙ бар һымаҡ...

Йыландар хаҡында халыҡ араһында имеш-мимештәр бихисап. Тәбиғәттең меңәрләгән серҙәренең береһе бит инде улар. Тимәк, был хаҡта тағы яҙыусылар булыр әле.

**Рафаэль АТАУЛЛИН.**
**Бөрйән районы Брәтәк ауылы.**

*КИТАБЕННАС*

# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында




**Был китаптың авторы - Джебран Хәлил Джебран 1883 йылдың 6 ғинуарында Ливандың төньяғындағы Бшарр ҡалаһында тыуған. Бик ҡатмарлы яҙмыш юлы үткән яҙыусы ғәрәп һәм инглиз телдәрендә берҙәй иркен яҙа алған. Донъя әҙәбиәтендә туған теленән тыш икенсе берәй сит телде камил үҙләштереп, үҙ стилен тапҡан ике телле яҙыусылар бик һирәк. Хәлил Джебран ана шундайҙарҙың береһе. "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX башында донъя күргән.**

### "Беҙгә шатлыҡ менән ҡайғы тураһында аңлат", тигән бер ҡатын...

"Шатлыҡ - ул битлек кеймәгән ҡайғы, - тигән Бәйғәмбәр. - Бөгөн һин күңел ҡоҙоғондан шатлыҡ менән тулы биҙрә күтәрҙең, ә бит кисә генә шул ҡоҙоҡҡа хәсрәт менән тулы күҙ йәштәрең түгелгәйне түгелме? Гел шулай була. Ҡайғы күңелеңә ни тиклем тәрән үтә, шатлыҡ та шунса һыя. Кисә лютня эшләүсе оҫта ағасты үткер бысағы менән ҡыйнамаһа, музыка ҡоралына әйләнгән ул ағас бөгөн матур көй сығармаҫ ине. Шатланған саҡта йөрәгең төпкөләнә ҡара - унда һин шатлығыңдан илауыңды күрерһең. Ҡайғырған саҡта ла ҡара - әле генә булған шатлыҡ һағышҡа әйләнә. "Ҡайғыға ҡарағанда, шатлыҡ күберәк!" - тип әйтер кемдер берәү. "Юҡ, ҡайғы күберәк!" - тиер икенсегеҙ. Әммә мин әйтәм: "Улар - айырылғыһыҙ". Береһе эргәндә ултырғанда, икенсеһе карауатыңда йоҡлап ята. Үлсәгестәге уҡ кеүек, гүмер буйы ҡайғы менән шатлыҡ араһында тирбәләһең. Күңелең буш саҡта ғына ул уҡ ҡатып ҡала".

### "Һин беҙгә торлаҡтар тураһында һөйләп бир", тигән ташсы...

"Өйҙә ҡала эсендә төҙөгәндә лә, уны тәбиғәт ҡосағында төҙөгән кеүек хис итегеҙ, - тигән Бәйғәмбәр. - Сөнки күңелегеҙ шуны теләй, өй - ул һеҙҙең дауамығыҙ. Һеҙҙең кеүек, ул да ҡояшҡа ҡарап йәшәй, төндә йоҡлап үткәрә. Ул да төш күрә, хыяллана. Хыялында ул да, һеҙҙең кеүек, ҡаланан ситтәге сауҡалыҡҡа бара, тау башына үрмәләй.

Эх, әгәр ҙә хәлемдән килеп, ул торлаҡтарҙы урман-яландар буйлап сәсеп сыҡһам, туғайлыҡтар - урамдарға, йәшел һуҡмаҡтар юлға әйләнер ине. Бер-берегеҙгә кейемдәрегеҙгә һеңгән ер еҫен алып барыр инегеҙ. Ләкин ваҡыты килеп етмәгән. Һеҙҙең ата-бабалар ҡурҡышынан бер-берегеҙгә һыйынған. Был ҡурҡыу тойғоһо әле һаман бөтмәгән. Ҡала стеналары һеҙҙе сәхрәгә сығармай.

Әйтегеҙ әле, нимә бар һуң һеҙҙең торлаҡтарығыҙҙа? Ул тимер ишектәр артында нимә һаҡлайһығыҙ? Йәшәү көсө биргән күңел тынысылығы бармы унда? Аң даирәһен киңәйтерҙәй хәтирәләр һаҡланамы? Таш диуарҙарҙан матурлыҡ түбәһенә илтеүсе юл бармы?

Әллә унда уңайлыҡтан башҡа бер нәмә лә юҡмы? Ул комфорт тигән хәйләкәр ҡараҡ өйгә башта ҡунаҡ булып килә, һуңынан хужа була, ахыр сиктә, хакимға әйләнә. Йыртҡыстарҙы ҡулға өйрәтеүсе һымаҡ, ул яйлап ҡына иң ҙур теләктәрҙе лә ҡурсаҡҡа, марионеткаға әйләндерә. Ҡулдары йомшаҡ булһа ла, йөрәге тимерҙән уның. Аҙаҡ кешелек сифаттарығыҙға төкөрөр өсөн ул башта һеҙҙе үҙенең көйөнә бейетә. Ул һеҙҙең ихлас тойғоларығыҙҙан көлөп, үҙенең матур тәтәйен тоттора. Зиннәт-байлыҡ эсендә йәшәүгә ынтылыу күңел дәртен һүндерә.

Ләкин һеҙ - донъя гиҙеүселәр, хатта төшөгөҙҙә лә тынғылыҡ белмәүсе романтиктар, бирешмәҫһегеҙ. Һеҙҙең кеүектәрҙең өйө якорь булып батмаҫ, елкәндәрҙе байраҡ итеп тотҡан мачта булыр. Өйөгөҙ күңел ярағыҙҙы ҡаплап торған ялтырауыҡ пәрҙә булмаһын, күҙ ҡабағы кеүек булһын. Ишек аша үткәндә ҡанатығыҙҙы яҡтауға бәрелмәһен, башығыҙҙы түшәмгә төкөмәгеҙ. Шул саҡта һеҙ үлгәндәр тереләр өсөн эшләп ҡалдырған ҡәшәнәләрҙә йәшәмәҫһегеҙ. Өйөгөҙ ни тиклем бай һәм матур булмаһын, ул һеҙҙең серегеҙҙе һаҡлай алмаҫ, һағышығыҙҙы йәшермәҫ. Сикһеҙ күңел дәртегеҙ бары бер өйгөгөҙ һыймаҫ, сөнки уның ишектәре - иртәнге томан, ә тәҙрәләре төн тынлығындағы дәртле йырҙар".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 26-28-се һандарҙа).**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




### "Алланан башҡа илаһ юҡ" - был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе нисек?

Дуҫым минә: "Миненсә, "Алланан башҡа илаһ юҡ" (лә илаһи иллал-лаһ) һүҙҙәренең мәғәнәһен артыҡ шаштыраһығыҙ кеүек. Әйтерһең, улар һәр йоҙаҡты асыр асҡыс. Мәйетте лә шул һүҙ менән күмәһегеҙ, яңы тыуған баланы ла шул һүҙ менән ҡаршылайһығыҙ. Йәнәһе, был һүҙҙе әйтеүселәр мәңгегә тамуҡ ғазабынан ҡотола, ә уны йөҙ мең мәртәбә ҡабатлаусылар ожмахҡа эләгә, тип раҫлайһығыҙ, әйтерһең, әлеге һүҙ ендәрҙән һаҡлаусы сихырлы талисман. Бына мин: "Алланан башҡа илаһ юҡ", - тинем дә ғазап-язанан ҡотолдоммо?" - тип теҙеп алып китте.

-Тукта, һин бит аңлатып китмәнең. Был һүҙҙәр Аллаға тоғрологон эш менән иҫбатлағандарға ҡағыла, ә буш боғаҙҙарға түгел. Был һүҙҙәр - тормош программаһы. Әйҙә, уларҙың мәғәнәһе тураһында бергәләп уйланайыҡ. "Алланан башҡа илаһ юҡ" тигәндә беҙ Алланан башҡа алла юҡлығын таныйбыҙ, - тип аңлата башланым. - "Юҡ" һәм "башҡа" һүҙҙәре араһында, инҡар итеү менән раҫлау араһында барлыҡ инаныуҙар ята. "Юҡ" инҡары илаһилыҡты доңъялағы бөтөн яманлыҡтан айырып ала. "Яманлыҡ" тигәне - беҙҙең күңелебеҙ тартынған нәмәләр, йәғни ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡ, тиранлыҡ, түбән тойғолар, әҙәпһеҙлек - былар ҙың барыһына ла беҙ "Юҡ! Беҙ һеҙгә табынмайбыҙ" тибеҙ. Бөтә кире нәмәләргә беҙ "Юҡ! Һин Алла түгел!" тибеҙ. Кеше йәне кеше менән идара итә, кеше йән теләктәренә, хистәренә, кәйефенә, һәләтенә, аҡылына табына, буйһона. Ул ҡулында яҙмыш, кешеләр, йәмғиәт асҡысы бар, тип уйлай. Кеше, үҙе лә һиҙмәҫтән, йәнен аллаға әйләндерә. Беҙ ана шундай йәнгә "Юҡ, һинә табынмайбыҙ беҙ, һин - Алла түгел!" тибеҙ. Беҙ директорға, мөдиргә, рәйескә лә "Юҡ!" тибеҙ.

"Илаһ" һүҙенең мәғәнәһе - ғәмәл итеүсе, ә беҙҙә Алла ғына ғәмәл ҡылыусы, ҡалғандары сәбәп һәм яраштырыусы ғына. Директорға, министр, рәйес, мөлкәт, дәрәжә, хакимлыҡ, үҙ аҡылы һәм һәләттәре булған йәнгә беҙ "Юҡ, һин Алла түгел", тибеҙ.

Әммә бынан бер иҫкәрмә яһайбыҙ һәм "башҡа" һүҙе менән ғәмәл итеүҙе Аллаһы Тәғәләгә генә ҡалдырабыҙ. "Юҡ" һәм "башҡа" һүҙҙәре, инҡар итеү һәр раҫлау араһында бөтөн нигеҙ һалынған. Матди байлыҡ туплау менән шөғөлләнгән, ялағай, ярамһаҡ, күңел асып йөрөүҙән башҡаны белмәүсе, йән талаптарын ғына үтәп йөрөүсе, аҡылына хеҙмәт итеүсе, үҙ фекеренә табыныусы - ул, үҙе лә низмай, ошо илаһтарға ғына табына. "Лә илаһи иллал-лаһ" тигәндә ул алдай, йәғни йөрәк ҡушыуы буйынса түгел, тел менән генә әйтә.

"Алланан башҡа илаһ юҡ" - ул вәғәҙә, закон, девиз, тормош программаһы һәм ғәмәлдәр маҡсаты, ул ошо һүҙҙәргә таянып эшләй һәм йәшәй тигәнде белдерә. Ошо девиз менән эш итеүсе өсөн ул ысынлап та талисманға әйләнәсәк, һәр ишекте асасаҡ, теге һәм был донъяла уға ҡотҡарыу, ожмах ишеге буласаҡ. Ә бушҡа тел болғап әйтеү - файҙаһыҙ.

Был - Алла барлығын таныу, шәхесте таныу һәм матди донъяны таныу, тигән һүҙ. Шул рәүешле Ислам идеалистик һәм материалистик философияларҙың икеһен бер юлы кире ҡаға һәм улар араһында урта бер урын ала.

Ислам идеалистик философияны инҡар итә, сөнки ул йәшәйеште һәм объектив белемде танымай. Идеалистик философияла һәр нәмә төш йәки фекер рәүешендә йәшәй, тип һанала. Һин, урам, радио, йәмғиәт, гәзиттәр, һуғыш - былар барыһы ла ысынбарлыҡ түгел, ә беҙҙең аҡылыбыҙҙағы үҙенә күрә бер төш кенә. Ислам был ҡараш менән килешмәй.

Ислам шулай уҡ материалистик философияны ла кире ҡаға, сөнки ул Алланы, әхирәтте инҡар итә һәм объектив донъяны ғына таный.

Ислам - реалистик философия менән реалистик фекерҙәр. Ул объектив донъяны таный. Алла яратҡан һәр нәмә шул донъяға инә. Ислам уң һәм һул фекерҙәрҙе бер фәлсәфәгә берләштерә. Был һәр фекерҙең тырышлығын талап итә.

"Алланан башҡа илаһ юҡ" раҫлауы - тормош планы һәм философик фекерләү. Шуға күрә "Алланан башҡа илаһ юҡ" тигәндә, һин ялғанлайһың. Һин - материалист, материалистик философияны һайлағанһың икән, тимәк, һин ике ялған һөйләйһең. Беренсенән, һин үҙ философияңа ҡаршы киләһең, икенсенән, был раҫлау буйынса тыуҙан бөртөгөләй ҙә ғәмәл ҡылмайһың.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

### Уҡымышлы эгоизм зарурлығы

Тәү сиратта был тормошта үҙегеҙгә маҡсат ҡуйыуҙы йәки әлеге ваҡытта булған маҡсатығыҙҙы үҙгәртеүҙе кәҙаллай. Әгәр һеҙ ҙә башҡалар кеүек һәм яҙмышығыҙға битараф кеше икәнһегеҙ, тимәк, үҙегеҙҙе тормоштағы ролегеҙгә ярашлы билдәләйһегеҙ (ир-ҡатын, инженер, етәксе һ.б.), тормоштағы маҡсатығыҙҙы башҡаларға хеҙмәт итеү призмаһы, дөйөм эшкә үҙ өлөшөгөҙҙө индереү һәм тирә-яҡтағыларға ярҙам итеү аша күрәһегеҙ. Әммә был бит идиотлыҡ! Әгәр үҙегеҙҙе тормоштағы ролегеҙ менән билдәләйһегеҙ икән, үҙегеҙҙе шәхси үҙенсәлектән мәхрүм итәһегеҙ, был инде үҙбаһаның иң түбәне.

Эйн Рэндтың "Сығанаҡ" китабының бер персонажы: "Мин һине яратам", - тип әйткәндә, "Мин" һүҙе нисек әйтелгәнен белергә кәрәк", - ти. Кемде булһа ла яратыр өсөн тәү сиратта үҙеңде ярат ырға кәрәк икәне барыһына ла мәғлүм. Әммә был ғәмәлдә нимәне аңлата һуң? Рэнд беҙҙе тормошта өс фундаменталь ҡиммәттәргә таянырға кәрәклеген өйрәтә:

1. Маҡсат
2. Айыҡ аҡыл
3. Үҙ-үҙеңде ихтирам итеү

Хәҙер, әйҙәгеҙ, был атамаларҙы эгоизм, үҙ ихтыяждарыңды ҡәнәғәтләндереү һәм тормошта бәхет табыу тураһындағы бәхәс менән бәйләп ҡарайыҡ.

Мин һеҙҙең өсөн иң юғары әхлаҡи ҡиммәт булып үҙ бәхетегеҙ тороуына ышанам. Был - берҙән-бер сәләмәт йәшәү рәүеше, барлыҡ тереклектең берҙән-бер тере ҡалыу һәм күпселек кешенең имен йәшәү ысулы. Бынан тыш, ул мөнәсәбәттәрҙе һаҡлауҙың берҙән-бер лайыҡлы ысулы! Үҙегеҙҙе башҡалар хаҡына ҡорбан итергә тейеш түгелһегеҙ. Шулай уҡ башҡаларҙан да һеҙҙең өсөн үҙҙәрен ҡорбан итеүен көтөргә тейеш түгелһегеҙ. Тирә-яҡтағыларҙың әхлаҡи таркалыуы - кеше үҙе әхлаҡи тарҡалыу кеүек уҡ зыянлы.

Үҙ-үҙеңде һәм тирә-яҡтағыларыңды меҫкен итеп күрһәтеү берәүгә лә файҙа килтермәйәсәк. Эйн Рэндтың "Атлант яурындарын яҙҙы" китабында төп геройҙарҙың береһенән: "Иң боҙоҡ кеше ниндәй?"- тип һорайҙар. Уның яуабы, моғайын, күптәрҙе аптыратыр, сөнки ул кеше үлтереүсене лә, көсләүсене лә, ниндәйҙер маньякты ла телгә алмай, ә "Маҡсатһыҙ кеше", ти. Рэндтан ни өсөн уның геройы шулай тип яуаплауын һорағас, ул: "Сөнки кеше шәхесенең тап шул дефекты уның барлыҡ насар ҡылыҡтарының сәбәбе булып тора. Садизм, диктатура һәм яуызлыҡтың башҡа формалары - кешенең ысынбарлыҡтан ҡасыуы һәм уның уйлай белмәүе һөҙөмтәһе. Маҡсатһыҙ кеше - осраҡлы хис-тойғолар һәм көйһөҙлөк солғанышында йәшәй һәм үҙ тормошон бөтөнләй контролләмәй. Тормошто контролләү өсөн кешенең конструктив маҡсаты булырға тейеш", - тип яуаплай.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ ГРАММАТИКАҺЫН БЕЛӘҺЕҢМЕ?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**28-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Итикира. Голограмма. Иҫәп. **Джейкоб**. Астана. Бразилия. Опал. Буратино. Эдмонтон. Байконур. Ҡарсығa. Дүшәмбе. Верн. Априори. Ташкент. Яла. ФИФА. Салауат. Бессеменов. **Цзиньпин**. Пеле. Ижау. Газон. Милек. Абай. Алмаз. Гана. **Мукерджи**. **Путин**. Кофе.

**Вертикаль буйынса:** Ябыҡ. Стетоскопия. Реванш. Ләм. Сеанс. Крамбе. Ғына. Гайдн. Статистика. Жакоб. Ламеру. Иловайский. Ежуга. Зееман. Олоно. Коалиб. Варяг. Диск. Блэр. Цигун. Ампер. Диаграф. Лье. Игли. **Русеф**. Акхьяна. Миопия. Лакки. Яунде. Ирга. НДРЙ.

*ТӘҘРӘ ТӨБӨМ...*

## ГӨЛ ӨСӨН АШЛАМА

Гөл һулып, ауырып, үҫә алмай ултырған осраҡта уға өй шарттарында әҙерләүе ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған иретмә һибеп, терелтеп алырға мөмкин. Бының өсөн 5-6 йомортҡа ағына 1 литр йылы һыу ҡойоп бер аҙна төнәтергә. Һуңынан был төнәтмәгә 10 литр һыу өҫтәп ҡойоп, гөлдәргә һибергә кәрәк. Был иретмә хуш еҫле булмаһа ла, гөлдәргә тиҙ арала йән өрөп, үҫеп китергә ярҙам итер.

Тәҙрә төптәрегеҙ аллы-гөллө гөл-сәскәгә күмелеп ултырыуын теләһәгеҙ, сүпрә иретмәһе һибергә мөмкин. Сүпрә үҫемлектәрҙе файҙалы һаналған матдәләр менән тәьмин итә, фитогормондар бүлеп сығара. Гөл төбөнә сүпрә иретмәһе һипкән саҡта төрлө микроорганизмдарҙың активлығы көсәйә, азот һәм фосфор бүленеүе менән органик есемдәрҙең минералға әүерелеү процесы тиҙләтелә. Гөлгә 1 процент сүпрә иретмәһен һибеү бер миҙгеллек комплекслы ашлама индереүгә тиң. Был сүпрә иретмәһен 10 грамм сүпрәгә 1 литр һыу нисбәтендә әҙерләйҙәр.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (4) дүшәмбе | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 20:05 | 21:35 | 23:05 |
| 21 (5) шишәмбе | 3:39 | 5:09 | 13:30 | 20:04 | 21:34 | 23:04 |
| 22 (6) шаршамбы | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 20:02 | 21:32 | 23:02 |
| 23 (7) кесе йома | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 20:01 | 21:31 | 23:01 |
| 24 (8) йома | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |
| 25 (9) шәмбе | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 19:58 | 21:28 | 22:58 |
| 26 (10) йәкшәмбе | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАҠСА*



# КӘБЕҪТӘ КҮБӘЛӘГЕ

**Баҡсала кәбеҫтә үҫтереүҙең артыҡ ауырлығы юҡ кеүек. Һыуыҡтарға сыҙамлы булғанға күрә, ул бөтөн зоналарҙа ла яҡшы үҫә. Төбөн йомшартып, сүбен утап, һыу һибеп торһаң, кәбеҫтәгә башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй, тиер инек, зарарлы ҡоротҡостары яфаламаһа.**

Ысынлап та, кәбеҫтәгә артыҡ көс түгергә лә кәрәкмәй. Утап, төбөн күмеп торһағыҙ, уның тамыры нығына. Һыуҙы башта йыш һибәләр, тамыры өҫтә урынлашыу һөҙөмтәһендә, кәбеҫтә тупраҡтан дымды алмай тиерлек. Етмәһә, эре япраҡтары һыуҙы быуға әйләндереп кенә тора, кәбеҫтәгә йомарланған осорҙа үҫемлеккә тәүлегенә 10 литрға тиклем һыу кәрәк. Әгәр ҙә дым етешмәһә, кәбеҫтә күсәне бәләкәй була. Даими һипмәһәң, кәбеҫтә ярыла башлай. Шуға ла күсән формалашҡан мәлдә 6-8 көн һайын мул итеп һыу һибегеҙ. Уңыш йыйып алырға 30-40 көн ҡалғас, һыу ҡоймаһаң да була, шул саҡта уны һаҡлауы еңелерәк була.

Ҡоротҡостар темаһына әйләнеп ҡайтҡанда, һәр ваҡыт кәбеҫтәнең япраҡтарын иғтибарлап ҡарап торорға кәрәк булыр. Кәбеҫтә себененең йомортҡалары аҡ төҫтә була, уларҙан яйлап ҡарышлауыҡтар сыға һәм үҫемлектең тамыр үҙәгенә үтеп инеп, уны ҡорота. Кәбеҫтә себене йомортҡалары күренеү менән уны йыйып алырға һәм тупраҡҡа карбофос иҙелмәһе (1 л һыуға 1-2 мл) һибегеҙ. 7-10 көндән яңынан эшкәртегеҙ. Кәбеҫтә күбәләге йомортҡаларын да ҡарап торорға кәрәк буласаҡ. Ҡарышлауыҡтар сығыу менән уларҙы йыйып алығыҙ. Ҡарышлауыҡҡа ҡаршы иң яҡшы сара булып дендробациллин, битоксибициллин, лепидоцид, гомелин биопрепараттары иҫәпләнә. Улар менән үҫентене 1-2 тапҡыр эшкәртәләр. Быны ҡоро көндө, кисен башҡарыу яҡшы, сөнки был саҡта ҡарышлауыҡтар әүҙем туҡлана башлай. Тик һауа температураһы 14 градус йылынан түбән булғанда биопрепараттарҙан файҙа юҡ, уларҙың составындағы микроорганизмдар үҫешә алмай.

Кәбеҫтә күбәләген махсус рәүештә тоторға ла була. Бының өсөн ҡуйы шәкәр сиробы әҙерләп, бер аҙ сүпрә һалып, тәрилкәләргә ҡойоп, үҫентеләр араһына ултырталар.

Кәбеҫтә араларына әнис, кишер, һуған, настурция сәскәһен ултыртыу яҡшы, ти баҡсасылар. Ҡайһы бер ҡоротҡостар теш порошогы, көлдән дә ҡурҡа. Томат ботаҡтары, сөйәл үләне төнәтмәһе (1 биҙрә һыуға 0,5 кг ҡоро үлән) һибеү файҙалы.

Кәбеҫтә артыҡ дымдан ҡарая башлаһа, марганцовка иҙелмәһе һибәләр һәм тупраҡты ҡом менән ҡаплайҙар.

**Кәбеҫтә күбәләгенә ҡаршы халыҡ саралары:**

- Тигеҙ өлөштә дегәнәк, әрем, менъяпраҡ үләнен алып, 1 өлөш үләнгә 3 өлөш ҡайнар һыу ҡойоп, бер нисә көн төнәтәләр. Һөҙөргә һәм кәбеҫтәгә һибергә.
- 1 биҙрә ҡайнар һыуға 0,5 л иләнгән көл өҫтәп болғайҙар, һыуынғансы һәм көл тонғансы көтәләр. Үтә күренмәле шыйыҡсаны ҡойоп алғас, уға 2 ҡалаҡ шыйыҡ һабын өҫтәйҙәр. Кәбеҫтәгә һибәләр.
- 200 г ҡарағай йәки шыршы тубырсығына 2 л йылы һыу ҡойоп, бер аҙна төнәтегеҙ. Һөҙөргә һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Ҡулланыр алдынан концентратты һыу менән иҙәләр (1:10). Һәр ике аҙна һайын ҡоро көндә һибергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

***"Шундай байлыҡтың шундай кеше ҡулында булыуы йәл, - тип уйлай аҡһаҡал. -Аҡыл ынйыһы уның юлын яҡтыртмай, күңелен байытмай, тормошон биҙәмәй, ғәҙәти тормоштан юғарыраҡ күтәрмәй, уның исемен данламай. Ҡалай йәл!"***



ӘЙТЕШ

# ЯҠШЫҒА ВАҠЫТ ЕТТЕ...

**Гәзитебеҙҙең 25-се һанынан алып шиғри әйтеште Яғылса менән Супай сәсәндәр дауам итте. Был һанда улар атты башҡа сәсәндәргә туғармаҡсы, йәғни Яғылса менән Супай сәсәндәр араһындағы әйтеш тамам булды. "Яҡшыға ваҡыт етте..." тигән оранды уны ишетеүселәр күңеленә, аңына еткерә алдылармы улар, юҡмы - уныһы гәзит уҡыусы хөкөмөндә.**

**Супайҙың Яғылсаға әйткәне:**

Ҡай саҡ дәүләттең ғүмере
Кеше ғүмерле булмай!
Мин тыуған дәүләт тә юҡ бит,
Ә мин теп-тере былай...
Быуаттар буйы йәшәгән
Дәүләттәр һирәк була -
Берсә туҙҙырыла улар,
Яңыһы тыуып тора.
Шуға илдәр тарихтарын
Яҙғандар аптырата:
Ул тарихты кемдәр уҡыр
Һүрәтләнгән ил юҡта?

Тарихсылар баһа бирер:
Булған, ҡыйралған, үлгән...
Ил йәшәмәҫ, халыҡ йәшәр
Үҙенең яйы менән!
Илдәр бөтөп, китеп торор
Сал тарих төпкөлөнә,
Халыҡ яңы тормош ҡорор,
Яйлап яңы иленә.
Ил бөтә, тип ҡайғырған юҡ,
(Күп күрҙек бөткәндәрен),
Күберәктер, барлап китһәң
Халҡыңдың үткәндәрен.
Шуға ла, тим, ил, дәүләт, тип
Әллә ни баш ватмайыҡ,
Ниндәй дәүләт ҡоролмаһын,
Унда йәшәй бит халыҡ!
Өҫтәгеләр, сәйәсәт тип,
Әйҙә, ил тип баш ватһын,
Халыҡ өсөн үҙ мөнбәре,
Үҙ ере генә Ватан!
Ниндәй генә сәйәсәттәр
Үткәрһә лә бит халҡым,
Күңелендә һаман йыры,
Йөрәге тулы ялҡын...
Ана шуны, сайпылтмайса,
Артабан илтеү фарыҙ.
Шул төп эше йыраусының,
Сәсәнгә лә шул бурыс!

**Яғылсаның Супайға әйткәне:**

Тарихты бит яҙыусылар
Кәкере лә бармаҡлылар.
Үҙенеке генә бөйөк,
Ҡалғандары һармаҡмылыр.
Искәндәрме, Цезармы ул,
Улар бөйөк юлбашсылар.
Рәсәйгә яу килтерһә,
Булып сыға баҫҡынсылар.
Күптәрҙең яҙған тарихы
Бары шикле фараз ғына.
Ысын тиеп ышаныуҙар
Беҙҙең өсөн зарар ғына.
Жуковты ла Солженицын
Атаған бит, браконьер, тип.
Аҡты ғына күрһәтәләр,
Бөйөк яугир, бригадир, тип.
Әле лә бит яҙғандары
Ағы ғына, ҡараһы юҡ.
Ышанабыҙ ялғандарға,
Әйләндереп ҡарайһы юҡ.
Аталһаҡ та республика -
Байлығыбыҙ Мәскәүҙеке.
Тәү йортобоҙ Шүлгән дә бит
Туя белмәҫ мәскәйҙеке.
Бөтә дәүләттәрҙә лә бар
Өҫтөнлөккә эйә халыҡ.
Ярай әле Ҡоролтай бар,
Башҡорттарым, тип уйларлыҡ.
Сәсән булыр ниндәй кеше,
Уныһы ла ҙур мәсьәлә.
Сәсән булып аталырмы,
Яҙып мәҫәл, йә мәҡәлә.

**Супайҙың Яғылсаға әйткәне:**

Яҡшыға ваҡыт етте , тип
Әйтеште беҙ башлағайныҡ,
Сәсәнлекте терелтергә
Шулай оран ташлағайныҡ.
Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул:
Халыҡ барҙа - сәсән тыуыр!
Һәр ауылда - үҙ шағиры
Һәм үҙ диуанаһы булыр.
Донъя барҙа - бөтмәҫ илдәр,
Дәүләт-ара әр-һуғыштар.
Ил тарҡалһа, ойошһа ла
Осоп торор һанһыҙ баштар.
Һәр саҡ шулай булған, булыр,
Өйөрөлөр Ер тигән шар.
Шул өйөрмә эстәрендә
Мең михнәтле халыҡ йәшәр.
Һәр заманда яратабыҙ
Тормошҡа беҙ зарланырға.
Киләсәк - төн, бөгөн - эңер,
Үткән генә яҡты сыға.
Туннелдәрҙән яҡты күреү
Хас түгел шул халыҡҡа һис.
Хәйер, күпме өрһә лә эт,
Йөрөргә бит бүре тейеш!
Ана шулай, күпме генә
Зарланһаҡ та, илай-илай,
Әллә ниндәй заманда ла
Йәшәй халыҡ, халыҡ йырлай.
Сағыштырып ҡарайым да
Мин үҙемдең бала саҡты,
Халҡымдың да тормошо, тим,
Ул сағымдан күпкә яҡшы!
Шөкөр итеү түгел һис тә,
Ысынбарлыҡ бары шулай.
Оптимист мин. Ышаныс ҙур:
Йәшәй халҡым. Булһын шулай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәйгебеҙҙә сират көтөп тороусылар бар, уларҙы ла алдағы һандарҙа гәзит биттәренә сығарырбыҙ. Артабан да әйтеш ҡорорға теләүсе яңы авторҙар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

*ЯҢЫ КИТАП*

## ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА ИСЕМЕНДӘГЕ "КИТАП" НӘШРИӘТЕНДӘ...

Бөгөнгө шиғриәтебеҙҙә лирика оҫтаһы булараҡ танылыу алған Риф Әхмәҙиевтың "Хәтер мәле" (Мгновение памяти) тип аталған шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыҡты. Унда авторҙың һуңғы йылдарҙа матбуғат биттәрендә донъя күргән һәм шулай уҡ уҡыусылар яратып өлгөргән әҫәрҙәре индерелде. Автор шиғриәтенең философик, гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған әҫәрҙәре иҫәбенә тулыланыуы йыйынтыҡтың тематик төрлөлөгән, идея-эстетик юғарылығын һәм образлы-ассоциатив саралары бай булыуын дәлилләй.




Фәрзәнә Аҡбулатованың ошо көндәрҙә донъя күргән "Янған аттар" (Загнанные кони) китабына роман һәм хикәйәләре тупланған. Был романы "Яҙылып бөтмәгән китап" романының дауамы. Төп герой Зәһүрәнең мажаралары дауам итә. Заманыбыҙ тынғыһыҙ ханым алдына ҙур һынауҙар ҡуя. Ул яңы әҫәр өҫтөндә илһамланып эшләй. Был әҫәрен тамамлармы, юҡмы? Роман аҙағында уҡыусы һорауға үҙе яуап табыр.

Танылған юмор оҫтаһы Мар. Сәлимдең "Заманына күрә көлкөһө" (О времена ...) китабында сатира һәм юмор тупланған. Уның әскелтем-сөскөлтөм әҫәрҙәре төрлө кешегә төрлөсә тәьҫир итә. Уларҙы уҡығас, берәүҙәрҙең ауыҙы йырыла, икенселәрҙең йөҙө һытыла. Яҙыусы-сатириктың геройҙары араһынан кемдер үҙен эҙләй, кемдер таныштарын таный. Был йыйынтыҡҡа көлкө оҫтаһының ана шундай тәьҫирле яңы әҫәрҙәре тупланған.

Башҡорт телендә донъя күргән баҫмаларҙы нәшриәттең фирма магазиндарында һатып алырға мөмкин.

**Нәркәс КҮРПӘСОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## КҮҢЕЛДӘ БАР...

### телгә килер

Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап килһен; ырыуыңа тап килмәһә, ораныңа тап килһен.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡал бай ғына йортҡа барып инә һәм әллә ни әһәмиәте булмаған әйберҙәр араһында алтын тышлы, ынйы менән биҙәлгән китап күреп ҡала.**

**- Ошо китапты ҡарарға мөмкинме?- тип һорай ул хужанан.**

**- О-о, был бик ҡиммәтле китап! Һаҡ ҡына тотон инде...- ти хужа кеше.**

**- Мин китаптан башҡа бер ни менән дә ул тиклем һаҡ тотонмайым... - тип хужаны тынысландыра аҡһаҡал. - Минең өсөн донъяла аҡыллы китаптан да ҡәҙерлерәк бер нәмә лә юҡ. -Китаптың бер нисә битен асып ҡарағандан һуң, ул тағы ла былай тип өҫтәй: - Был китап ысынлап та баһалап бөткөһөҙ ҡиммәткә эйә. Һеҙ был хазинаны ҡайҙан алдығыҙ?**

**- Мин уны сәйер генә бер кешенән һатып алдым, - ти хужа. - Ул ошо хазинаны ижад итеү өсөн бар байлығын тотоноуы тураһында әйтте. Тағы ла ул былай тине:"Китаптың ҡиммәте бик юғары, шундай заман килер - был китап өсөн тотош байлығын бирергә әҙер булырҙар". Мин ҡыҙығып китеп, кеҫәмдә булған ғына аҡсаны биреп, уны һатып алдым. Миңә уңыш йылмайҙы, был китаптың яҙмышын хәл иткәндә мин, әлбиттә, уның өсөн бик ҙур байлыҡ һораясаҡмын...**

**Аҡһаҡал китаптың тағы бер нисә битен асып ҡарай һәм ҡапыл ҡысҡырып ебәрә:**

**- Был китап бит иң билдәле бер аҡыл эйәһенеке. Бында уның иң ҡиммәтле һүҙҙәре тупланған. Был ысынлап та Аҡыл һандығы! Ошондай хазинаның хужаһы икәнһең, һин бәхетле кеше!**

**- Эйе, мин был китап өсөн үҙем биргәндән мең тапҡырға күберәк аҡса аласаҡ икәнемә ышанам, - ти бай аҡһаҡалдың һүҙҙәренән тағы ла нығыраҡ рухланып.**

**- Китапты уҡып сыҡһаң, ул һине байытып ҡына ҡалмаясаҡ, ә донъялағы иң көслө кеше итәсәк...-ти аҡһаҡал.**

**- Ләкин мин уҡый белмәйем... - ти хужа.**

**- Уҡырға өйрән һуң! - ти аҡһаҡал хужаны аҡылға килтерергә теләп.**

**- Минең уйымса, был китапты һатыуҙан килгән байлыҡ миңә былай ҙа донъяны ярларға, һатып алырға етәсәк... - шулай ти ҙә хужа, китапты аҡһаҡалдың ҡулынан алып, күренеп торған урынға һөйәп ҡуя. - Минең ниндәй байлыҡҡа эйә булыуымды барыһы ла күрһен! - ти ул шундай ғорурлыҡ менән.**

**"Шундай байлыҡтың шундай кеше ҡулында булыуы йәл, - тип уйлай аҡһаҡал. - Аҡыл ынйыһы уның юлын яҡтыртмай, күңелен байытмай, тормошон биҙәмәй, ғәҙәти тормоштан юғарыраҡ күтәрмәй, уның исемен данламай. Ҡалай йәл!" Шундай әсенеү менән аҡһаҡал туҙанлы кәштәлә ятҡан Алтын тормош китабына эйә иҫәр байҙың өйөнән сығып китә..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3278